✓ *Иртән өйөңдән сыҡҡан һайын эйәгеңде күтәр, башыңды юғары тот, үпкәләреңде саф һауа менән тултыр, ҡояш нурҙарына йылмайып баҡ һәм һәр осраған кешенең ҡулдарын ихлас итеп ҡыҫ. Дошмандарың йә башҡа күңелһеҙ нәмәләр тураһындағы уйға бер генә минут ваҡыт та ҡалдырма. Дөрөҫ уйлау - ул ижад итеү, ул үҙеңдең баһаңды белеү, ул сәләмәтлегеңде һаҡлау.*

*(Генри Форд).*

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

18 - 24 ДЕКАБРЬ (АҠЪЮЛАЙ) 2010 ЙЫЛ

www.kiskeufa.ru | 2002 йылдан башлап сыға | Һатыуҙа хаҡы ирекле | №51 (417)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Улымдың һорауҙарына яуаптар,**

йәғни Мәжит Ғафури эҙҙәре буйлап сәйәхәт



**5**

**Атып ҡалғансы,**

ятып ҡалыуҙы... хуп күрмәйек



**6**

**Өфө - тауҙа, унда үрләргә кәрәк,**



**8-9** Ә Стәрлетамаҡ тигеҙ урында...

**Йорт һалыуҙың нимәһе бар?**



Сутлайһы ла мүкләйһе!

**12**

**14** ТВ-программа


*ИШАРА*

# ТӘБИҒӘТ БАЛАЛАРҘА ЯЛ ИТӘ,

## ә ейән-ейәнсәрҙәрҙә йәшәй...

**Әгәр ҙә "Киске Өфө" гәзите башҡа баҫмаларҙан ҡайһы яғы менән айырыла?", тигән һорау ҡуйылһа, яуапты ябайлаштырып, шулайыраҡ итеп бирергә булыр ине: "Гәзит уҡыусыға ниндәйҙер ваҡиға хаҡында һөйләүҙән йә мәғлүмәт еткереүҙән ғәйре яңы фекер еткерергә тырыша". Бына беҙ инде ошо маҡсатта гәзит ижад итә-итә һигеҙенсе йәшебеҙҙе тултырып, 2010 йылды ослап киләбеҙ. Мәктәп йәше менән һанағанда, икенсе синыфты ғына тамамлайбыҙ. Иң һөйөнөслөһө шул: ошо йылдар эсендә беҙҙеңсә фекер йөрөткән күп һандағы тоғро уҡыусыларыбыҙ барлыҡҡа килде. Уларҙы беҙ "Киске Өфө" "Фекер институты"ның тоғро студенттары" тип тә атай алабыҙ. Улар, асылда, башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары. Үҙебеҙ шаһит булғаныбыҙ бар: уларҙың күптәре дәрестәренә беҙҙең гәзитте тотоп инә һәм шуның буйынса дәрестәрен үткәрә.**

Шул уҡ ваҡытта беҙҙе борсоуға һалған икенсе бер күренеш хаҡында ла әйтмәйенсә булмайҙыр. Гәзит битендә башланған фекер алышыуҙар уҡыусылар менән осрашҡанда ла дауам итә, беҙ шул саҡта уҡыусыларыбыҙҙың иҫ киткес мәғлүмәтле, тәрән фекерле булыуына хайран ҡалабыҙ. Әммә теге йәки был мәҡәләлә күтәрелгән проблема хаҡында үҙ фекерен белдереп яҙып ебәреүселәр әллә ни күп булмай сыға. Ярай әле, гәзит яҙмышын үҙ яҙмышы итеп ҡабул иткән Фәүзиә Яхина апай һымаҡ авторҙарыбыҙ бар. Уҡыусыларыбыҙ менән беҙҙең араны улар бәйләй. Авторҙарыбыҙҙы дәртләндереү йәһәтенән төрлө конкурстар ойоштороу ҙа ярҙам итмәгәненә үҙ тәжрибәбеҙҙә инандыҡ.

Ғөмүмән, иң күп мәғлүмәтле, иң тәрән фекерле уҡыусыбыҙҙың төрлө осраҡта ла шымып ҡалыуын нисек аңлатырға була һуң? Гәзит эшендә генә түгел, ғөмүмән, тормошобоҙҙоң һәр өлкәһендә лә был күренеш күҙәтелә бит. Әйтәйек, ҡатлы-ҡатлы титуллы йырсы сәхнәлә күкле-йәшелле тауышы менән ҡолаҡты ярған тамашала ысын халыҡ йырсыһы, ғәҙәттә, тамашасылар араһында булып сыға. Сөнки сәхнәлә торған йырсыға әрһеҙлек, тырышлыҡ, ә ысын йырсыға әҙәплелек һәм талант һалынған. Үҙ еребеҙгә ысын мәғәнәһендә хужа булыр етәксе лә төрлө сәбәптәр менән карьера баҫҡыстары буйлап үрләтелмәй ҡалғанына шаһитбыҙ. Тормошта, үкенескә ҡаршы, күп осраҡта шулай килеп сыға, Әнғәм Атнабай һүҙҙәре менән әйткәндә, "Шағир булыр кеше - шофер, шофер булыр кеше - шағир", шул.

Кешене әүҙем тормош менән йәшәүгә саҡырыу, өндәү ҙә әллә ни һөҙөмтә бирмәй. Бары тик кеше үҙенең йәшәү маҡсатын бойомға ашырыу йүнәлешендә әүҙем булһа ғына ундай кешене ысын мәғәнәһендә әүҙем тип атарға була. Көсләп асылған күҙҙең нуры булмай, көслөк менән ил булмай, тиҙәр. Шул уҡ ваҡытта гәзиттә баҫылған фәһемле фекерҙәрҙе уҡып, күңеленә һеңдереп, башына һалып ҡуйған кешегә: "Һин нишләп шундай-шундай мөһим фекергә битарафһың, ниңә уға ҡарата үҙ фекереңде белдермәйһең?" тип дәғүә белдереү ҙә урынһыҙ. Сөнки, психологтар фекеренсә, кешенең башына һалынған, күңеленә уйылған бер генә фекер ҙә бушҡа китмәй, юҡҡа сыҡмай.


**(Дауамы 2-се биттә).**


*ҠУЛ БЕЛГӘН ШӨҒӨЛ*

# КҮҢЕЛЕБЕҘ БИҘӘКТӘРЕН...

## шәлгә төшөрәбеҙ, ти оҫталар

**Борон-борондан халҡыбыҙ үҙенең йәшәү рәүешенә, ғәҙәтенә ярашлы тауарҙарҙы - донъя көтөү кәрәк-ярағтары, кейем-һалым һәм аяҡ-кейемдәре, атты биҙәү әйберҙәре, һыбай йөрөү өсөн кәрәк-яраҡтар, дини-ғибәҙәт әйберҙәрен үҙе етештергән, ситтән килтермәгән. Шулар араһында башҡорттоң туҡылған шәле - башҡа халыҡтарҙың туҡыу сәнғәтендә ише булмаған ҡабатланмаҫ күренеш.**




**Дауамын 11-се биттә уҡығыҙ.**

ИҒТИБАР!

# ХӨРМӘТЛЕ УҠЫУСЫБЫҘ!

**2011 йылдың беренсе ярты йыллығына гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһы тамамланыу алдында. Яратҡан дуҫың, серҙәшең, фекер уртаҡлашыр баҫмаңа яҙылып ҡалырға ашыҡ.**

➔ Гәзитебеҙгә яҙылыу тураһындағы квитанцияларын редакцияға ебәреүселәр бүләкһеҙ ҡалмаясаҡ. Уларға **микротулҡынлы мейес, кеҫә телефоны, сепаратор, электр сәйнүге, үтек** һәм башҡа төрлө матур бүләктәр отторасаҡбыҙ.



Квитанцияларын тәүгеләрҙән булып ебәргән 300 кеше "Дини календарь" алып ҡыуанасаҡ.

➔ Әйткәндәй, кемде бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә **тыуған көндәрен** хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

➔ **"Киске Өфө" - бүләгем"** акцияһы ла дауам итә. Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, ата-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

➔ **Һәм тағы...** Халыҡ араһында гәзит-журналдарҙы таратыу йөгө барыбер ҙә **почтальондар** иңенә төшә. Уларҙың энтузиазмын, тырышлығын юғары баһалайбыҙ, хөрмәт итәбеҙ, оло рәхмәтебеҙҙе еткерәбеҙ. Шуға ла гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһы һөҙөмтәләре буйынса почтальондарыбыҙҙы ла бер аҙ бүләкләп китергә уйлайыҡ. Иң күп "Киске Өфө"нө яҙҙырған почтальондарға **ДВД-плеер, кеҫә телефоны, электр сәйнүге, үтек һәм башҡа бүләктәребеҙ** бар. Почта бүлексәләренән ошо бүләктәребеҙгә лайыҡлы почтальондар тураһында белешмәләр көтәбеҙ.

**50665** индекслы **"Киске Өфө"** алты айға **330 һум 24 тин, 50673** индекслыһы (предприятие һәм ойошмалар өсөн) - **360 һум 24 тин** тора.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

АФАРИН!

# ТӘБИҒӘТ БАЛАЛАРҘА ЯЛ ИТӘ,

## ә ейән-ейәнсәрҙәрҙә йәшәй...

(Башы 1-се биттә).

"Тәбиғәт балаларҙа ял итә, ейән-ейәнсәрҙәрҙә йәшәй", тиҙәр. Ошо күҙлектән ҡарағанда, бөгөн беҙҙең гәзитте уҡыусы үҙе, балалары өсөн түгел, ейән-ейәнсәрҙәре өсөн аҡыл, мәғлүмәт, фекер байлығы туплай, йәғни аҫҡы аңына һала. Тимәк, бөгөн һалынған мәғлүмәт, белем, аҡыл бары тик 30-50 йылдан һуң ғына әүҙем тормош позицияһы өсөн кәрәкле фекер йөрөтөү ҡоралына әүереләсәк. Тимәк, был йәһәттән беҙҙең гәзиттең ысын мәғәнәһендәге һөҙөмтәһе 30-50 йылдан һуң ғына беленәсәк, ундағы идеялар тормошҡа ашасаҡ, тип әйтергә урын ҡала бында. Шундайын хикмәтле һәм ҡөҙрәтле ул "аҫҡы аң" төшөнсәһе.

Беҙ өр-яңынан тормош башлаған сабый хәлендәбеҙ. Ә ниңә бөгөнгө урта быуын кешеләре һәм уларҙан йәшерәктәр бары тик үҙенең аҫҡы аңын тулыландырыу менән генә шөғөлләнә, тулы ҡанлы әүҙем тормош менән йәшәмәй, ошо йүнәлештә фекер йөрөтмәй һуң? Сөнки уларҙың аҫҡы аңына белем, аҡыл һалыр олатайҙарын, ҡартатайҙарын шәхес культы, һуғыш уты йотто. Иҫән ҡалғандарының аңын коммунистик утопия, торғонлоҡ быуҙы. Был бер беҙҙең милләткә генә ҡағылмай. Беҙ илебеҙҙең социалистик тип аталған осороноң һөҙөмтәләрен тағы ла бик оҙаҡ татыясаҡбыҙ әле.

Кешенән маңҡорт яһау механизмы ла уның тарихын онотторoуға ҡоролғанын бик яҡшы беләбеҙ. Ҡыҙ-ҡатын фиғелле, йомшаҡ характерлы ир-аттарҙың да күбәйеүен ошо уҡ формула менән аңлатып була. Уларҙың аҫҡы аңына мәғлүмәтте, аҡылды, тәжрибәне күберәген өләсәй-картәсәйҙәре һалған, тимәк.

ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Үҙемдең бер ҡуҙәтеүем. Ҡыҙыбыҙға 10 ай тулды. Ул бөгөн ике төрлө тауышҡа ныҡ иғтибар итә. Телевизорҙан йә радионан ҡурай моңо яңғыраһа, сабыр ғына тыңлай, ҡушылып йырлай. Тағы ла әсәһенең телефоны көйөн ишетһә, уны ҡулына алып, унан ағылған көй ыңғайына тантана итә, бейегән хәрәкәттәр яһай. Ә инде башҡа төрлө тауыш сығанаҡтарын бар тип тә белмәй. Сәбәбе: мин әсәһе ауырлы сакта уҡ ҡурайҙа уйнай торғайным, ә әсәһенең телефонына яҙылған көйҙә ул яҡты донъяға тыуғансы уҡ 9 ай буйына тыңлап йөрөнө. Мейегә һалынған аң, белем, мәғлүмәт фекер йөрөтөү кимәленә үҫешеп еткәнсе ваҡыт кәрәк шул. Ә һеҙ нисек уйлайһығыҙ? Хәйер, был һорауға бары тик һеҙҙең ейән-ейәнсәрҙәрегеҙ генә тулы яуап бирә аласаҡ. Шулай түгелме?**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**



Архангель районының башҡорт теле уҡытыусылары.

УҠЫУСЫ ҺҮҘЕ

# ЕГЕЛЕП ЭШЛӘГӘС...

**"Киске Өфө"нө сыға башлағандан алып бер һанын да ҡалдырмай уҡыйым, ул минең иң яратҡан гәзитемә әйләнде. Был баҫманан үҙеңә кәрәк булған бөтә мәғлүмәтте алырға була. Миңә бигерәк тә уның дизайны оҡшай. Беренсе биттәге анонстар ниндәй мәҡәләнең ҡайһы биттә урынлашҡанын билергә ярҙам итә, ә колонтитулда бирелгән мөһим фекерҙәр, афоризмдар иғтибарыбыҙҙы фәһемле фекергә ылыҡтыра. Гәзиттең уҡыусылары үҙҙәре яратҡан рубрикаларҙың ҡайһыһы ҡайһы биттә икәнен белеп тора. Әгәр рубрикалар бер һанда - бер биттә, икенсеһендә икенсе биттә урынлашһа, уҡыусының күңелен төшөрөр ине. Сөнки кешенең психологияһы шулай ҡоролған: һәр ерҙә тәртип булғанын ярата ул. Бында ла шулай: уҡыусы гәзитте ҡулына алғас та үҙенең яратҡан рубрикаһын бер үк урында күрергә теләй.**

Йөкмәткеһенә килгәндә, мин үҙем гәзиттәрҙә һүҙ буҡһы ҡуйырткандарын яратмайым, гөмүмән, һүҙ буҡһы бер кемгә лә оҡшамайҙыр ул. Фекерҙәр ниндәйҙер бер тәртиптә бирелергә тейеш, шул осраҡта ғына уҡыусының иғтибары аныҡ материалға йәлеп ителәсәк. Әгәр материалдың бирелеше, тәртибе булмаһа, ул уны уҡый башлаясаҡ та ташлаясаҡ. "Киске Өфө"лә һүҙ буҡһы ҡуйыртылмай, ә кәрәкле, фәһемле мәғлүмәттәр генә бирелә. Монолог жанрына килгәндә, уны уҡыуы ҡыйын, тиеүселәр ҙә бар ул. Әммә улар тәрән йөкмәткеле булыуы, милли рух тәрбиәләүе менән ҡиммәт. Гөмүмән, һәр мәҡәлә милли рух менән һуғарыла. Шуның менән "Киске Өфө" күп баҫмаларҙан бер баҫҡысҡа юғарыраҡ тора, тип әйтер инем.

"Киске Өфө" гәзите - ошо баҫмала эшләүсе бөтә журналистарҙың да ижад емеше. Уларҙың бер һүҙле булып, бер төптән, бер аңлы булып, оло яуаплылыҡ тойоп эшләүе һәм халҡыбыҙ өсөн битараф булмай, улар өсөн тырышыуы ошондай һөҙөмтәгә килтерәләр, тип уйлайым.

**Нәилә ИҪӘНБАЕВА -ӘХМӘТЙӘНОВА,**
**филология фәндәре кандидаты.**

# НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Республикаһы Президенты Указы менән 2013 йылда Өфөлә йәштәр командалары араһында шайбалы хоккей буйынса Донъя чемпионаты үткәреү һәм әҙерләнеү буйынса саралар планы раҫланды.

✓Ошо көндәрҙә Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов Төркиәнең Sisecam (Шишеджам) концернының Директорҙар советы рәйесе Әхмәт Кырман менән осрашты. Осрашыуҙа Башҡортостанда быяла етештереүҙе үҫтереү мәсьәләләре, шулай уҡ республика биләмәһендә берлектәге проекттарҙы тормошҡа ашырыу тураһында һүҙ алып барылды. Билдәле булыуынса, был концерн Өфөлә 2004 йылда "Русджам-Өфө" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте заводы төҙөп, сафҡа индергәйне. Ул бөгөн Европала иң эре быяла һауыт етештереүсе предприятие иҫәпләнә. Унда 770-тән ашыу кеше эшләй.

✓Социаль туризмды үҫтереү буйынса республика программаһы йыл аҙағына тиклем БР Хөкүмәтенә ҡарауға тәҡдим ителәсәк. Үҙенсәлекле проекты БР Эшҡыуарлыҡ һәм туризм буйынса дәүләт комитеты эшләгән. Проекттың төп позициялары буйынса, оло йәштәгеләрҙең, пенсионерҙарҙың һәм инвалидтарҙың туристик путевкаларын компенсациялауға республика бюджетынан 37-38 млн һум аҡса бүлеү ҡуҙаллана. Программа ярашлы, йылына 3 мең самаһы социаль турист сәйәхәт итә аласаҡ.

✓БР Хөкүмәте менән ЮНЕСКО араһында хеҙмәттәшлек тураһындағы килешеүгә ярашлы, 13-21 декабрҙә "Балтик буйы диалогы - Салауат Юлаев эҙҙәре буйлап" халыҡ-ара акция-экспедиция ойошторолдо. БР-ҙың ЮНЕСКО эштәре буйынса комитетының Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты вәкилдәре, Салауат ҡалаһы һәм районы делегациялары, мәктәп һәм вуз уҡытыусылары, ижади хеҙмәткәрҙәр ҡатнашлығындағы делегацияһы Өфө - Санкт -Петербург -Таллинн - Палдиски - Рига - Юрмала - Вильнюс -Тракай - Каунас - Калининград - Өфө маршруты буйлап сәйәхәт итәсәк.

✓Мәскәүҙә Кремль һарайында үтәсәк Бөтә Рәсәй Яңы йыл шыршыһына Башҡортостандан 132 уҡыусы китәсәк. Балаларҙы эске эштәр органдары хеҙмәткәрҙәре, врачтар, уҡытыусылар оҙатып барасаҡ. Уларҙы Мәскәүҙә "Измайлово" ҡунаҡханалар комплексында урынлаштырасаҡтар.

АҘНА ШАҢДАУЫ

# "ШАШЫНҒАН"ДАР МӘСКӘҮҘЕ ТУҘҘЫРА,

## йәки Кавказ халыҡтарының Рәсәй урамдарында лезгинка бейергә хоҡуғы бармы?

**Хәтерләйһегеҙме, элегерәк, Советтар Союзы ваҡытында, тимәксемен, "берҙәм һәм бүленмәҫ" йәмғиәтебеҙ өс синыф вәкилдәренән тора ине - эшселәр, колхоз крәҫтиәндәре һәм зыялылар, йәки интеллигенция. Коммунизм төҙөлгәс, илебеҙҙә синыфтар ҡалмаясаҡ, тип раҫланы "мәңге тере" марксизм-ленинизм тәғлимәттәре. Коммунизм төҙөп өлгөрмәнек. Тәртәләребеҙҙе ҡабаттан капитализмға борҙоҡ. Синыфтар ҙа юҡҡа сыҡманы. Киреһенсә, артабан үҫешә башланы. Яңы сәйәси-иҡтисади формация шарттарында уларҙың һаны күбәйҙе генә. Элек булғандары иһә юҡҡа сығып бара.**

Әйтәйек, интеллигенция. Бармы бөгөн улар? Эйе, ҡайһы берәүҙәр ысынлап та үҙҙәрен һаман интеллигенция тип һанайҙыр? Асылда иһә, улар күптән инде сауҙагәрлеккә, эшҡыуарлыҡҡа тотондо. Уның ҡарауы, яңы синыфтар килеп сыҡты. Әйтәйек, бөгөн сауҙагәрҙәрҙе айырым синыфҡа бүлеп сығарырға мөмкин. Улар күп (баҙарҙарҙа сауҙа итеүселәр, киоскылар тотоусылар һәм уларҙа ултырыусылар бигерәк тә). Маҡсаттары ла уртаҡ. Үҙ хоҡуҡтары өсөн көрәшкә күтәрелергә әҙерҙәр. Айырыуса, уларҙың мөлкәттәренә йоғонһалар. Баҙарҙарҙы япҡанда, мәҫәлән, сауҙагәрҙәр дәррәү күтәрелеп, петициялар яҙып, хатта ваҡытлы матбуғат сараларын һәм ябай халыҡты үҙ яҡтарына ауҙарырға маташып, маҡсаттарына ирешергә тырышты. Бынан тыш, илебеҙҙә олигархтар синыфы ла барлыҡҡа килде, тип әйтергә лә булалыр. Хәйер, уларҙы синыф тип атарға мөмкинме һуң? Уларҙың һәр береһе үҙ мәнфәғәттәрен генә ҡайғырта ла баһа. Ана, Ходорковскийҙы төрмәгә япҡастар, бер генә булһа ла олигарх урамға сыҡтымы? Лозунг күтәреп? Йәки күҫәк тотоп? Дөрөҫ. Сыҡманы. Шуға ла улар үҙҙәрен синыф тип иғлан итә алмай. Олигархтар әлегә - ҡатлам ғына. Икмәк киҫәге өҫтөнә йоҡаҡ ҡына итеп һөртөлгән ҡыҙыл, йәки ҡара ыуылдырыҡ кеүек улар. Үҙҙәре ҡыйбат, үҙҙәре аҙ.

Ә бына пенсионерҙарҙы айырым бер синыфҡа бүлеп сығарырға була. Уларҙың уртаҡ сифаттары күп. Беренсенән, бөтәһе лә тиерлек бер үк төрлө шарттарҙа йәшәй. Ул шарттарҙы бөтәгеҙ ҙә яҡшы беләһегеҙҙер, тип уйлайым. Бөтәһенә лә алтмыш йәштән күберәк. Бөтәһененең дә тиерлек килемдәре бер үк кимәлдә. "Килем" һүҙен был осраҡта тырнаҡ эсенә алырға ла мөмкиндер. Үҙҙәренең хоҡуҡтарын яҡлар өсөн пенсионерҙар тупланышып урамға сығырға әҙер. Һәм сығалар ҙа.

Кавказ кешеләре менән аңлашылмаусанлыҡ килеп сыҡты. Улар айырым бер милләтме, әллә синыфмы? Милләт тиһәң дә була. Мәскәү күҙлегенән ҡарағанда, әлбиттә. Танауҙары кәкере, йөҙҙәрен һаҡал баҫҡан. Бөтәһе лә лезгинка бейей. Һәр хәлдә, баш ҡала халҡы уларҙы шулай ҡабул итә. Кавказда йөҙәрләгән милләт вәкилдәре ғүмер итеүен белмәй шикелле улар. Икенсе яҡтан ҡараһаң, Кавказ халыҡтарын берләштергән синфи үҙенсәлектәрҙе лә табырға була. Берҙәмдәр, ойошҡандар, бер-береһенә ярҙам итергә әҙер торалар. Шөғөлдәре лә бер үк тиерлек. Маҡсаттары ла уртаҡ.

Әле бына илебеҙҙә яңы бер "синыф" килеп сыҡты. Фанаттар. Пенсионерҙарҙан айырмалы рәүештә, былар, ғәҙәттә, йәштәр. Көстәре ташып тора. Быға тиклем улар башлыса стадиондарҙа, спорт ярыштары мәлендә генә үҙҙәренең синфи берҙәмлеген күрһәтә ала ине. Үткән аҙнала Мәскәүҙә булған ваҡиғаларҙан һуң фанаттар баш ҡаланы (хәйер, баш ҡаланы ғына түгел, ә, асылда, бөтә илде) дер һелкетеү мөмкинлегенә эйә булған көс икәнлеге асыҡланды. Дәһшәтле көс. Ҡурҡыныс көс. Фанаттарҙың, йәки башҡортса, шашынғандарҙың (фанатизм - латинсанан "шашынып табыныу") Мәскәү урамдарына һәм майҙандарына сығып шашыныуына нимә йәки кем сәбәпсе булды һуң, тип һорарһығыҙ. Яуапты ваҡытлы матбуғат саралары күптән бирҙе инде. Мәскәүҙә 6 декабргә ҡараған төндә урамда йәштәр араһында булған ыҙғыш ваҡытында Егор Свиридов исемле егетте үлтерәләр. Беҙҙең илдә ни, көн һайын бер түгел, бер нисә кешене үлтереп торалар инде, тип ғәжәпләнерһегеҙ, моғайын. Заманалар шулай тора, тиерһегеҙ. Тик был егет ябай кеше түгел, ә "Спартак" спорт клубының фанаты булып сыҡҡан. Ә уның ғүмерен ҡыйыусылар иһә Кавказ халыҡтары булып сыҡҡан. Кабардиндармы, абхаздармы, әллә аварҙармы - уныһы билдәһеҙ. Ваҡиға урынына бынабына полиция булырға торған милициябыҙ килеп еткән. Бөтәһен дә ҡулға алған. Тик һуңынан ...азат иткән. Бөтәһен дә. Ваҡытлы матбуғат саралары хәбәр итеүенә ҡарағанда, йәнәһе, милиция участкаһына диаспоралар етәкселәре килеп етеп, Кавказ егеттәрен (йәғни, енәйәтселәрҙе) бик аҫтынан сығарып алған һәм Ҡаф тау тарафтарына оҙатҡан. Йәмәғәт, әллә мин аңһыҙ, әллә урамға сыҡҡан фанаттар тинтәк. Кавказдарҙы (ә улар менән бергә Урта Азия халыҡтарын) туҡмау урынына, уларға бит енәйәтселәрҙе иреккә сығарған милиция һәм прокуратура хеҙмәткәрҙәрен стенаға терәтергә ине.

Ә инде хоҡуҡи нигеҙҙән сығып ҡарағанда, ғөмүмән, фанаттарҙың сығыштары - рөхсәтһеҙ акция. Йәғни, законды боҙоу. Егор Свиридовты үлтереү - ул енәйәт. Тикшереүселәрҙең эше - енәйәт эше асыу, шаһиттарҙан һорау алыу, дәлилдәр туплау һәм эште судҡа тапшырыу. Һәм - вәссәләм. Ә судтың эше иһә дәлилдәргә, шаһиттарҙың һөйләгәндәренә нигеҙләнеп, ғәҙел хөкөм сығарыу. Кемдер башҡаса уйлаймы? Беҙ бит, йәмәғәт, хоҡуҡи дәүләттә йәшәйбеҙ, тип раҫлайбыҙ түгелме? Конституциябыҙ, Президентыбыҙ, Енәйәт һәм Енәйәти-процессуаль кодексыбыҙ, дәүләттең именлеген, уның граждандарының хоҡуҡтарын һаҡлау өсөн тәғәйенләнгән махсус хеҙмәттәр бар. Ни өсөн һуң фанаттар урамға сыға? Әйтергә кәрәк, буш ҡул менән сыҡмай. Тарихтан беләбеҙ, пролетариаттың ҡоралы - һуйырташ. Ә фанаттарҙыҡы - бейсбол битаһы. Икенсерәк әйткәндә, күҫәк. Ҡоралланған "шашынған"дар Мәскәүҙең Манеж майҙанына барышлай юл буйында осраған Кавказ халыҡтарын, башҡа "нацмен"дарҙы (кем белмәй, аңлатам - НАЦиональное МЕНьшинство, йәғни, милли аҙсылыҡ) туҡмай, ҡанға туҙҙыра. Әллә улар дәүләттең сәйәсәте менән риза түгелме? Әллә улар "Закон - бөтә кеше өсөн дә бер", йәки "Закон алдында бөтәһе лә бер тигеҙ" тигән фекерҙәр менән риза түгелме? Рәсәй Федерацияһы Конституцияһының 19-сы статьяһын асып ҡараһындар.

Һәм тағы ла, һүҙ араһында ғына. Үҙәк ваҡытлы матбуғат саралары (һәм улар ғына түгел, ә төрлө кимәлдәге яуаплы вазифаларҙы биләгән түрәләр ҙә) Мәскәүҙәге ҡайһы бер милләт вәкилдәренә ҡарата "диаспора" һүҙен ҡулланырға ярата. Ә бит диаспора - халыҡтың ҙур ғына өлөшөнөң үҙенең тарихи Ватанынан, йәшәгән иленән ситтә башҡа дәүләттәрҙә тупланыуын аңлата. Диаспоралар башлыса тыуған илдән көсләп ҡыуып сығарыу, йәки геноцид һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килә. Тимәк, Мәскәүҙәге чечендарға ҡарата "диаспора" һүҙен ҡулланыу уларҙың үҙ ерҙәренән ҡыуылып китеүен таныу тигән һүҙ бит. Әллә чечендар, аварҙар, черкестар, балҡарҙар һәм башҡа бик күп халыҡ вәкилдәре өсөн Рәсәй Ватан, тыуған ил түгелме?

Мәскәү урамдарында был көндәрҙә "Россия - для русских!", "Москва - для москвичей!" тигән өндәүҙәр яңғыраны. Конституцияға ярашлы, һәр бер гражданиндың теләгән урынында йәшәргә һәм эшләргә хоҡуғы бар (Рәсәй Федерацияһының 27-се статьяһы). Тимәк, өҫтәге лозунгыларҙы яңғыратыусылар Төп Законыбыҙҙы ғәмәлдән сығарырға ынтыла. Ә инде урамдарҙа лезгинка бейеүгә килгәндә, уны тыйырға маташыу - Конституцияның 44-се статьяһын боҙоу, тигән һүҙ.

Әйткәндәй, хоҡуҡи нигилизм, йәғни закондарҙы инҡар итеү, фанаттарға ғына хас күренеш түгел. "Россия" телеканалы Мәскәү урамдарында Юл йөрөү ҡағиҙәләрен боҙғандарҙы күрһәтте. Араларында ябай машиналарҙа йөрөгән ябай кешеләр юҡ, әй. Ике һыҙатты киҫеп үтеп, ҡаршы юлдан йөрөүселәр араһында депутаттар, тышҡы разведка хеҙмәткәрҙәре, дәүләт органдары эшмәкәрҙәре (һәр хәлдә, улар үҙҙәрен шулайтып таныта). Балыҡ башынан серей, тигән башҡорт. Халыҡ һүҙен саҡ ҡына көсәйтеп "Балыҡ иң башынан серей" тип әйтергә лә булалыр.

"Шашынғандар"ҙың сығыштарынан һуң өҫтәгеләрҙең аныҡ реакцияһын көткәйнем. РФ эске эштәр министры Рәшит Нурғәлиевтың буталсығыраҡ сығышынан башҡаһын ишетмәнем. Милләт-ара мөнәсәбәттәрҙе хәл итеү, килеп тыуған мәсьәләләрҙе көйләү (ә был осраҡта фанаттар урыҫ милләтселәре лозунгылары аҫтында сығыш яһаны) милицияның эше һәм бурысы түгел. Рәсәй Федерацияһы Конституцияһының гаранты - Рәсәй Федерацияһы Президенты (Рәсәй Федерацияһы Конституцияһының 80-се статьяһы). Былай ҙа саҡ-саҡ ҡоршалып торған федерациябыҙ аңһыҙ футбол фанаттары һәм уларҙы ҡотортоп тороусылар тарафынан емерелеп ҡуймаһын, тим инде.



**Таһир ИШКИНИН.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Салауат ҡалаһында Башҡортостан Фәндәр академияһы тарафынан ҡаланың социаль-иҡтисади проблемаларын асыҡлау ниәтендә һорау алыу үткәрелгән. "Эскелектән һәм наркоманлыҡтан мәжбүри дауаларға кәрәкме?" тигән һорауға салауатлыларҙың 80 проценттан ашыуы ыңғай яуап биргән.

✓ Белорет ҡыҙы Лилиә Шобухова АҠШ-тың Спорт академияһы раҫлауҙары буйынса иң яҡшы спортсы исеменә дәғүәселәр исемлегендә. АҠШ-тағы был исемлек буйынса бирелә торған премия донъя спортында иң абруйлыларҙан һанала. Беҙ 24 декабргә тиклем яҡташыбыҙ өсөн http://ussa.edu/ballots/athlete-of-the-year/ сайты аша тауыш биреүҙә ҡатнаша алабыҙ. Лилиә Шобухова оҙон араға һәм марафондарҙа йүгерә. Быйыл ул Чикагола үткән марафонда рекорд ҡуйып, донъяла иң яҡшы йүгереүсе исемлегенә ингәйне.

✓ Күмертауҙа башҡорт таҡмаҡтары башҡарыусыларҙың II Республика конкурсы булып үтте. Гран-при Резедә Нуримановаға (Нуриман районы) һәм "Йөрәктау" (Стәрлетамак) фольклор ансамбленә бирелде. "Аҡбуҙат" балалар ансамбле (Көйөргәҙе районы), "Дуҫлыҡ" фольклор ансамбле (Ишембай районы), Фирүзә Ғәлиәхмәтова (Учалы районы) һәм Земфира Ибраһимова (Кумертау) беренсе урын яуланы.

✓ 18-22 декабрҙә республиканың Көньяҡ Урал райондарында айыҡ йәшәү рәүешен әүҙем пропагандалаусы танылған Рәсәй ғалимы, тарих фәндәре докторы, этнолог Виктор Павлович Кривоногов семинарҙар үткәрә. Семинарҙар 18 декабрҙә Хәйбуллала, 19-20 декабрҙә - Сибай ҡалаһында, 21 декабрҙә - Баймаҡта һәм 22 декабрҙә Әбйәлил районында үтә. Сара "Айыҡ Башҡортостан" Республика йәмәғәт ойошмаһы инициативаһы менән ойошторола. Уның сиктәрендә Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты һәм республиканың профилле министрлыҡтары менән берлектә тормошҡа ашырыласаҡ "Иң айыҡ ауыл" республика конкурсы проектын презентациялау буласаҡ. Бәйләнеш өсөн телефон: 8 927 314 32 02, Роберт Дәүләтшин.

✓ Башҡортостан 21-30 ғинуарҙа Берлинда үтәсәк "Йәшел аҙналыҡ-2011" форумында ҡатнашасаҡ. Унда республиканан Башҡортостан Ҡортсолоҡ һәм апитерапия буйынса фәнни-тикшеренеү үҙәге һәм "Башспирт" предприятиеһы үҙ тауарҙарын тәҡдим итәсәк.

ӘЙТӘГҮР!

# КЕМГӘ - ГӘЗИТ, кемгә - интернет...

**Элек-электән ташҡа баҫылған һүҙ - ҡәҙерле һүҙ һаналған. Кешегә мәғлүмәт тә биргән, кәрәк саҡта уята, ниндәйҙер хәл иткес ҡарар ҡылырға дәртләндерә алған. Һүҙ тәьҫире көслө, тибеҙ. Тағы шуныһы: исемендә ташҡа баҫаһың икән, ниндәйҙер оло яуаплылыҡ алаһың. Йәғни, хаҡ һүҙ әйтелә бында. Ә һүҙҙең ышаныдыру көсө шул тиклем юғары. Әммә гәзит-журналдарҙың тиражына күҙ һалаһың да, кәмей барыуына гәжәпләнәһең. Тимәк, халыҡ баҫма матбуғатты башҡа мәғлүмәт сараларына, йәғни интернетҡа алыштыра булып сығамы инде?**

**Зөфәр ТИМЕРБУЛАТОВ, З.Биишева исемендәге "Китап" нәшриәте директоры:** Мәғлүмәткә ҡытлыҡ кисерелмәгән заманда йәшәйбеҙ. Бер туҡтауһыҙ яуған мәғлүмәт "ямғырынан" халыҡ баҙап ҡалды хатта. Интернет киң ҡулланылыш таба бара. Ә шулай ҙа ул баҫма матбуғатты ҡыҫырыҡлап сығара алмаҫ, тип уйлайым. Тик баҫмаларыбыҙ ҙа заманса шарттарға ярашлы үҙгәрергә тейеш. Баҫмаларыбыҙ мәғлүмәт биреү менән генә сикләнеп ҡалмай, ә аналитик материалдарға өҫтөнлөк бирергә тейеш. Шуның менән уҡыусыны уйландырырға, уларҙың мең төрлө һорауҙарына яуап бирергә бурыслы ул. Уҡыусы тормош ҡуйған һынауҙарҙы нисек йырып сығырға, нисек хәл итергә, тиғән һорауҙарҙы гәзит биттәренән эҙләргә тейеш. Белеүебеҙсә, республикалағы һәр гәзиттең рәсми сайты эшләй. Башлыса уларҙа баҫманың тарихы һәм һуңғы һандағы мәғлүмәттәр баҫыла. Сит ил матбуғаты сайттарына күҙ һалғанда, мәғлүмәттең 10-15 минут һайын яңыртылыуына шаһит булаһың. Беҙ ҙә ошо ысулды ҡуллана башларға тейешбеҙ.

**Анжела САФИНА, З.Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт академияһы студенты:** Гәзит-журналды бала саҡтан уҡып үҫтем. Әле һаман берәй баҫма күрһәм, эргәһенән тыныс ҡына үтә алмайым. Ғаиләбеҙҙә лә гәзит килһә йығылып ятып уҡый инек. Ни тиһәң дә, гәзит-журналды йәйләп, тәфсирләп уҡып сығыу үҙе бер илаһи мәл. Йәш быуын кешеһе булараҡ, интернетты йыш файҙаланырға тура килә. Әммә ундағы быҫраҡлыҡ, ялғанлыҡ ялҡытып китә һәм тағы ла ҡулға гәзит алып, ундағы аҡ-ҡара менән яҙылған хәбәрҙәр донъяһына сумаһың. Интернеттан айырмалы рәүештә, матбуғат актуаль мәсьәләләрҙе яҡтырта. Мәҫәлән, үҙем йәштәр темаһын йотлоғоп уҡыйым. Сөнки минә тиҫтерҙәремдең фекерҙәре бик ҡыҙыҡ. Ғөмүмән, интернет барыбер ҙә ҡағыҙға баҫылған баҫма мәғлүмәт сараларын алыштыра алмаясаҡ, тип уйлайым.

**Нәйлә ЫЛАСЫНОВА, БДУ-ның Сибай институты доценты:** Бөгөн кеше аңын интернет ялай, тип һөйләһәк тә, ваҡытлы матбуғатҡа тоғро ҡалыусылар күп әле. Ҡағыҙ баҫма теләһә ҡайһы ваҡытта, төрлө урында уҡып булыуы менән уңайлы. Поезда, паркта һәм башҡа йәмәғәт транспорттарында гәзит, журнал, китап уҡыусылар осрап тора. Ә бына Мәскәү метроһында барыһы ла баш баҫып уҡый, тигәндәрен ишеткәнем бар. Гәзиттәр мәғлүмәт биреүҙән, кешене уйға һалыуҙан тыш, уҡыусыны телмәр мәҙәниәтенә, дөрөҫ фекерләргә лә өйрәтә. Бөгөн гәзит-журнал биттәренән төрлө социаль ҡатлам кешеләрен ҡыҙыҡһындырырлыҡ материалдар эҙләүҙе дауам итәбеҙ. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, популярлыҡ алыу маҡсатынанмы, баҫмаларыбыҙ сенсация артынан ҡыуыуға әүәҫләнеп китте. Йәғни, ошонан сығып, гәзит-журналдарыбыҙ интернеттағы материалдарҙы ҡабатларға тейеш түгел, тигән фекерҙәмен. Киләсәктә ҡағыҙ баҫманың заман шауҡымына бирелергә, данлы тарихын юғалтырға хоҡуғы юҡ.

**Данил ӘБДЕЛҒАЗИН яҙып алды.**

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ИХАТАЛАР ТӨҘӨКЛӨГӨ...

## һәр өфөлөнө борсой

**Өфө ҡалаһы 2011 йылда "Берҙәм Рәсәй"ҙең яңы юлдары" проектын тормошҡа ашырыу сиктәрендә ҡеүәтле генә финанс ярҙам аласағы тураһында яҙғайныҡ инде. Ҡала юлдарын ремонтлау, ихаталарҙы реконструкциялау өсөн Өфөгә 795 миллион һум бүленеүе көтөлә. Был сумманың бер өлөшө - 530 миллионы ихаталарҙы төҙөкләндереү өсөн тотоноласаҡ, ә 265 миллион һумы баш ҡала урамдарын ремонтлауға йүнәлтеләсәк. Киләһе йылда тормошҡа ашырыла башлаясаҡ был проект тураһында Өфө ҡала округы хакимиәте башлығының беренсе урынбаҫары Владимир ДМИТРЮК һөйләй.**

- Торлаҡ йорттар алдындағы ихаталар мәсьәләһе бөгөн өфөлөләрҙе айырыуса борсой. Ҡала хакимиәтенең рәсми сайтына һәм ҡыҙыу пейджерға килгән мөрәжәғәттәрҙең күбеһе тап ошо проблемаға арналған була. Халыҡ кварталдар араһындағы юлдарҙың насар булыуына, урамдарҙың төндә яҡтыртылмауына, уңайлы балалар ҡаласыҡтары булмауына, ағастар һәм сәскәләр ултыртылмауына зарлана.

185-се Федераль закон тормошҡа ашырыла башлағас, был тема буйынса мөрәжәғәттәр тағы ла артты, сөнки Торлаҡ-коммуналь хужалығын реформалауға булышлыҡ итеү фонды ярҙамында комплекслы капиталь ремонт барышында ҡайһы бер йорттар алдындағы ихаталарҙа автомобилдәр ҡуйыу урындары, башҡа уңайлыҡтар барлыҡҡа килде. 2008-2010 йылдарҙа ихата юлдарын асфальтлау өсөн ҡала бюджетынан 150 миллион һум бүленгәйне, бығаөҫтәп микрорайондарҙа яҡтыртыу системаһын модернизациялау өсөн 30 миллион һалынды. Тап ошонан һуң өфөлөләр өсөн "Ни өсөн күрше йорттоң ихатаһын төҙөкләндерҙеләр, ә беҙҙекен юҡ?" тигән һорау иң көнүҙәк мәсьәләгә әйләнде.

Ихата территорияларын төҙөкләндереү баш ҡалала даими алып барыла. Һуңғы биш йыл эсендә бының өсөн ҡала бюджетынан 316 миллион һумдан ашыу аҡса бүленде. Былтыр 75 йорттоң ихатаһы тәртипкә килтерелһә, алдағы йылдарҙа был һан күпкә юғарыраҡ ине. Үкенескә күрә, баш ҡалала проблемалы майҙандар әлегә етерлек һәм уны ҡала ҡаҙнаһы сараларына ғына хәл итеп бөтөп булмай. Шуға ла "Берҙәм Рәсәй"ҙең был программаһы сиктәрендә башҡарыласаҡ эш оло бер ярҙам буласаҡ.

Йорттар алдындағы ихаталар территорияһы буйынса төрлө. Мәҫәлән, Инорс һәм Шаҡшала улар иркен, ә Өфөнөң иҫке өлөшөндә - бәләкәй генә. Былтыр ҡайһы бер ихаталарҙы иркенәйтеп, бордюр таштарын алыштырғайныҡ. Ҡайһыларында асфальт япманы яңыртыу менән генә сикләнергә тура килде, сөнки ул майҙансыҡтарҙың күп кенә өлөшөн балалар ҡаласыҡтары һәм ағастар алып тора. Ағымдағы йылда ҡала бюджетынан бүленгән 53 миллион һум аҡсаға 75 ихата төҙөкләндерелде. Шуға ла "Берҙәм Рәсәй" партияһы проекты ярҙамында күпме ихата яңырып ҡаласағын алдан иҫәпләп сығарыу мөмкин түгел. Әммә мин ҙур ышаныс менән әйтә алам: был программаға ҡаланың бар райондары ла эләгәсәк.

Ҡаланың ҡайһы өлөшөндә ҡайһы ихата төҙөкләндерелеүгә мохтаж булыуы тураһында мәғлүмәт беҙҙә бар. Был мәсьәләне район хакимиәттәре, депутаттар, идара итеүсе ойошмалар ҙа контролдә тота. Әлеге ваҡытта проект өҫтөндә эш бара, унда ҡала халҡының теләктәре лә иҫәпкә алынyр. Әүҙем өфөлөләр бөгөн үк был һорау буйынса үҙ фекерҙәрен белдерә ала.

МОСОЛМАН ДОНЪЯҺЫ

# БАЛАЛАРҒА - ХӘЛӘЛ РИЗЫҠ

**Өфө ҡалаһының Салауат Юлаев проспектында ике-өс йылдан Рәсәйҙең иң матур мосолман йорто - собор мәсете ҡалҡып сығасаҡ. Был турала БР Президенты ҡарамағындағы дәүләт конфессия-ара мөнәсәбәттәр буйынса Совет етәксеһе Вячеслав Пятков хәбәр итте.**

- Рәсәй мосолмандарының Үҙәк диниә назаратында һәм Өфө ҡала округы хакимиәтендә был мәсет төҙөлөшө тураһында күптән һүҙ алып барыла, - тине Вячеслав Пятков. - Шулай ҙа әлегә был проекттың тормошҡа ашырылыу ваҡыты тураһында аныҡ ҡына әйтеп булмай. Был иң беренсе сиратта ошо ғибәҙәт биналын төҙөүгә талап ителгән финанс һалыуҙарға бәйле.

➔ Шулай уҡ Вячеслав Пятков Башҡортостанда тиҙҙән дини телетапшырыу эфирға сығасаҡ, тип тә хәбәр итте. "Бөгөнгө көндә беҙ "Дәүләт һәм дин" тип аталған махсус телевидение блогы әҙерләү менән мәшғүлбеҙ, - тине ул. - Бындай тапшырыуҙарҙа беҙҙең республикала эшләп килгән дини ойошмалар тураһында дөрөҫ мәғлүмәттәр биреләсәк".

➔ Башҡортостандың мосолман балалары уҡыған бер нисә мәктәбендә хәләл тукланыу индереләсәк.

- Бындай инициативаны балаларҙың ата-әсәләре күрһәтергә тейеш, - тине Вячеслав Пятков. - Улар бындай тәҡдим менән мәктәп йәки гимназия администрацияһына мөрәжәғәт итергә тулы хоҡуҡҡа эйә. Бында иң мөһиме - тәҡдим ителгән хәләл тукланыу системаһының санитар нормаларға тап килеүе һәм балалар сәләмәтлегенә өсөн файҙалы булыуы.

➔ "Иеогов шаһиттары" йәки башҡа дини ойошма вәкилдәре юлығыҙға ҡаршы сыға, фатир ишеген ҡағамы? Уларҙың әрһеҙлегенән ҡотолоу өсөн өфөлөләр яҡлау һорап хоҡуҡ һаҡлау органдарына мөрәжәғәт итә ала.

- "Иеогов шаһиттары" менән ысынлап та күп проблемалар тыуҙы, - тип һөйләп үтте Вячеслав Пятков. - Был йәһәттән уларға ялыуҙар беренсе тапҡыр ғына килмәй. Беренсенән, шуны аңлатып үтеү кәрәктер: күптәр уйлауынса, был секта түгел. Был хоҡуғы дәүләт тарафынан яҡланған рәсми рәүештә теркәлгән дини ойошма. Шул уҡ ваҡытта "Иеогов шаһиттары" вәкилдәренең фатирҙар буйлап йөрөп, урамдағы кешеләрҙе туҡтатып, үҙҙәренең фекерен кешеләргә көсләп тағып йөрөүе билдәле. Вячеслав Пятков фекеренсә, бындай күренеш дини ойошма этикаһына тап килмәй, шулай уҡ норматив-хоҡуҡ документтарына ла ҡаршы килә.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✔ Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы эргәһендәге сираттағы кәңәшмәлә үткәреләсәк Яңы йыл байрамы саралары тураһында мәғлүмәттәр тыңланды. Мәҙәниәт һәм сәнғәт буйынса идаралыҡ начальнигы Исламетдин Мәмбәтов билдәләүенсә, йылдағыса, "Вьюговей" Яңы йыл фестивале сиктәрендә асыҡ майҙансыҡтарҙа театрлаштырылған программалар, иң матур боҙ ҡаласығы һәм боҙ скульптураларына конкурстар үтәсәк. 27 декабрҙә Ленин майҙанында "Ҡыш бабай -2011" конкурсына йомғаҡ яһаласаҡ, Ҡыш бабайҙар парады буласаҡ.

✔ Ҡала мәҙәниәт һарайында Башҡортостандың баш ҡалаһында Уҡытыусылар йылын ябыу тантанаһы булып үтте. Бында баш ҡаланың төрлө профессиональ конкурстарында еңгән мәғариф хеҙмәткәрҙәре ҡотлауҙар ҡабул итте.

✔ Мәғариф идаралығы начальнигы Азамат Сәйфуллин билдәләүенсә, шыршы байрамдары мәктәптәрҙә 22 декабрҙән башлана. 22 декабрҙә Нефтселәр мәҙәниәт һарайында Президент шыршыһы, 23 декабрҙә - Баш ҡала шыршыһы, 24 декабрҙә социаль шыршы байрамы үтәсәк. 24-30 декабрҙә баш ҡалала социаль акция ла ойоштороласаҡ. Акцияла ҡатнашыусылар 300-ләп инвалид балаларҙың һәм 50-ләп күп балалы ғаиләләрҙең өйҙәрендә буласаҡ.

✔ Ошо көндәрҙә Эске эштәр министрлығының Иҡтисади енәйәттәр менән көрәш буйынса идаралығы законһыҙ ҡомарлы уйын бизнесына ҡаршы операция сиктәрендә 250 объектта булды. Әйтеүҙәренсә, был клубтарҙың күбеһе документтарһыҙ эшләгән, уйындар контрафакт программаларҙа тормошҡа ашырылған, йәғни ысынбарлыҡта уйынсы бер ниндәй отош та ала аламаған. Шуны беләкүрә торһалар ҙа, уйынсылар кәмемәгән.

✔ "Росздравнадзор"ҙың Башҡортостан идаралығы белгестәре үткәргән контроль-күҙәтеү саралары ваҡытында аптекаларҙа ялған "Арбидол" һатыу осраҡтары асыҡлана. Анализ һөҙөмтәләре күрһәтеүенсә, ул нормaтив документацияларға тап килә. Ләкин ялған препараттың арбитраж өлгөнән айырмалыҡтары бар. Шуға ла улар әйләнештән алынасаҡ.

ӨФӨЛӘ БАР…

# УЛЫМДЫҢ ҺОРАУҘАРЫНА ЯУАПТАР,

## йәғни Мәжит Ғафури эҙҙәре буйлап сәйәхәт



**Улым менән Өфө урамдары буйлап йөрөргә яратабыҙ. Бигерәк тә йәшлек эҙҙәре ҡалған урындарҙан үтеүе йөрәкте елкендерә, тулҡынландыра, рухландыра. Йәшлек хәтирәләре менән бер рәттән, улымды Өфөнөң иҫтәлекле, тарихи урындары менән таныштырам.**

• Бына Өфө ҡалаһының М.Ғафури исемен йөрөткән үҙәк паркы буйлап китеп барабыҙ. Халҡыбыҙҙың бөйөк улдары - Салауат Юлаев, М.Аҡмулла, Ә.Вәлиди, М.Ғафури һәм башҡа арҙаҡлы шәхестәребеҙ турағында һөйләйем. Минең һөйләгәндәремде тынлай-тынлай, улым тирә-яҡтағы матурлыҡты күҙәтә. Башҡорт әҙәбиәте классигы исемен йөрөткән паркта, ысынлап та,бик күңелле лә, мауыҡтырғыс та, Өфө ҡалаһы халҡын туплап,осраштырып торған мөһим урындарҙың береһе ул.

• Карл Маркс урамы, Чернышевский, Гоголь, Ленин урамдары "дүртмөйөш" буйлап йөрөйбөҙ. Чернышевский урамы башында элек данлыҡлы "Ғәлиә" мәҙрәсәһе урынлашҡан булған. Унда 1906 йылда Мәжит Ғафури уҡыған, һуңынан был йортто Мәжит Ғафури исемендәге мәктәпкә әйләндерәләр, ә хәҙер бында Ислам университеты урынлашҡан.

• 1923 йылда ижадына 20 йыл тулыу айҡанлы Мәжит Ғафуриға иң тәүгеләрҙән булып "Башҡорт халыҡ шағиры"исеме бирелә һәм республика Хөкүмәте уға Гоголь урамында урынлашҡан йортто бүләк итә. Аҙаҡ был йорт М.Ғафуриҙың йортмузейына әйләндерелә.Ошо йортта әҙип үҙенең күренекле "Кара йөҙҙәр", "Ҡыҙыл йондоҙ" һәм башҡа әҫәрҙәрен ижад иткән.

• Улым менән сәйәхәтебеҙҙе дауам итәбеҙ. Чернышевский урамынан унға Ғафури урамына боролабыҙ. Был урамға шағир үҙе иҫән саҡта уҡ, 1923 йылда, уның исеме бирелгән. Мәжит Ғафури тәүҙә хәҙерге Телеүҙәк ҡаршыһындағы йортта йәшәгән. Шағир үҙенең урамы буйлап йөрөргә бик яратҡан. Был урам ул ваҡытта Салауат Юлаев һәйкәле торған ергә тиклем һуҙылған булған. Шулай уҡ Ғафури урамында башҡа арҙаҡлы шәхестәребеҙ ҙә йәшәгән. Был урам бөгөнгө көндә ҡала халҡының һәм ҡунаҡтарҙың яратҡан урындарының береһе.

• Ҡалабыҙҙа Мәжит Ғафури исеменә бәйле иҫтәлекле урындар бихисап. Бына ҡаршыбыҙҙа М.Ғафури исемен йөрөткән Башҡорт дәүләт академия драма театры.1970 йылда театрҙың 50 йыллыҡ юбилейы айҡанлы бирелә уға ошо юғары исем. Һуңыраҡ, 1978 йылда, театр алдына шағирҙың һәйкәле ҡуйыла.

• Артабан улым менән юлыбыҙҙы дауам итәбеҙ. Ленин һәм Пушкин урамдары киҫешкән урында элекке Дворяндар собраниеһы, ә хәҙер Өфө дәүләт сәнғәт академияһы урынлашҡан. Шаляпин залының (элекке ҙур зал) икенсе ҡатында Мәжит Ғафуриға башҡорт халыҡ шағиры исеме бирелеү тантанаһы үткәрелә.

• Яңынан әйләнеп Карл Маркс урамына ҡайтабыҙ. Бында, К.Маркс һәм Пушкин урамдары мөйөшөндә урынлашҡан ике бер туған миллионер Кәримовтарҙың "Шәреҡ" типографияһында Мәжит Ғафури 1912 йылда корректор булып эшләгән.

• К.Маркс урамында урынлашҡан Үҙәк универмаг ҡаршыһында (Свердлов урамы,98-се йорт) революцияға тиклем "Сабах" китап магазины була. 1912 йылда был йортта татар халыҡ шағиры Ғабдулла Тукай туҡталып киткән, һәм тап ошо йортта ике бөйөк шағир күрешкән. Саҡ ҡына арыраҡ,хәҙерге Өфө дәүләт авиация-техник университетының төп корпусы янында элекке Иванов баҙары майҙанында 1917 йылда Мәжит Ғафури меңәрләгән халыҡ алдында башҡорт һәм татар хеҙмәтсәндәренең гимнына әүерелгән "Ҡыҙыл байраҡ" шиғырын уҡып ишеттерә.

• Февраль революцияһының еңеүен Мәжит Ғафури ҡыуанып ҡаршылай, совет власының беренсе көндәренән үк яңы көс менән яңы йәмғиәткә хеҙмәт итә башлай:башҡорт теле буйынса комиссия эшендә ҡатнаша, башҡорт телендә китаптар сығарыуға ярҙам итә. Мәжит Ғафуриҙың әҫәрҙәре Рәсәйҙең күп милләтле әҙәбиәтенең алтын фондына индерелгән.

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Улым менән Өфө урамдары буйлап сәйәхәтебеҙҙе артабан да дауам итәсәкбеҙ. М.Ғафуриҙың ғына түгел, башҡа яҙыусыларыбыҙ, күренекле шәхестәребеҙ тормошо, ижады, улар исеме менән бәйле иҫтәлектәр турағында һөйләйһе һүҙҙәр, күрһәтәһе урындар бик-бик күп әле...**

**Миндиниса ҒӘЗИЗУЛЛИНА, башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы.**

БЫНА ШУЛАЙ!

## ТЫЙЫЛҒАНҒА КЕМ ЫЛЫҒА?

**Ер шарының бер яғын һәр ваҡыт ҡояш йылытып тора, ә икенсе яғын һәр ваҡыт ҡуйы ҡараңғылыҡ ҡосҡан. Сәләмәт тормош яҡлылар көндөҙ йыйылыштар үткәрһә, эскеселәр, наркомандар ен туйҙарына төнөн йыйыла. Рәсми, беҙ күреп өйрәнгән донъяла айыҡлыҡты пропагандалаған саралар үтә икән, шул уҡ ваҡытта, ҡағыҙға булараҡ, ҡайҙалыр эскелекте, наркоманлыҡты таратыу пландары уйланыла, йәшерен генә тормошҡа ашырыла. Ерҙе йылытҡан ҡояш нурҙарында ҡыҙынып, туғандарың, дуҫтарың араһында рәхәтләнеп йәшә лә бит. Тыйылған емеш тәмен белеү теләге, серлелек күп кенә балаларҙың, йәштәрҙең зиһенен арбай. Был серлелектең артында бары үлем генә торғанын күптәр аңламай ҙа…**

Ошо көндәрҙә баш ҡала округы хакимиәтендә журналистар менән осрашыуҙа наркоманлыҡҡа ҡаршы көрәш комиссияһы эше турағында мәғлүмәт тыңланды.

Бөтә донъя Берләшкән милләттәр ойошмаһы күрһәткестәре буйынса, кешелектең 5 проценты наркотик ҡуллана. Рәсәйҙә алкоголизм һәм наркоманияның таралыуы ла бер төрлө генә түгел. Ил буйынса 100 мең кешегә 252 наркоман тура килә. Башҡортостанда 100 мең кешегә - 134, ә Өфө ҡалаһында 100 мең кешегә 274 наркотик матдәләр ҡулланыусы теркәлгән.

1-се Республика наркология диспансерының баш табибы Илдар Байков билдәләүенсә, беҙҙә наркологик ярҙам өс баҫҡыста атҡарыла: беренсеһе -балалар һәм йәштәр араһында наркоманлыҡты иҫкәртеү, икенсеһе - наркотик ҡулланыусыларҙы теркәп, улар араһындағы ауырыуҙарҙы иҫкәртеү, өсөнсө баҫҡыс - һауыҡтырыу-реабилитация саралары. Реабилитация үҙәгенә мөрәжәғәт итеүселәр араһында балалар һәм үсмерҙәр күбәйә бара. Уларҙың һаны былтырғы ошо уҡ осор менән сағыштырғанда 33,6 процентҡа артҡан. Бөгөнгө көндә республикала 70 урынлыҡ бер генә реабилитация үҙәге эшләй. Алдағы йылдарҙа шундай тағы бер нисә үҙәк асыу планлаштырыла.

**Реабилитация үҙәктәре асыу бөгөнгө көндә актуаль мәсьәлә. Бер яҡтан уйлағанда, ундай үҙәктәр асылыуының ваҡытлыса сара булырына ышанабыҙ. Ауырыуҙар һауығып бөтһә, бер мәл был йорттарҙы асыусылар уларҙы кире ябырға онотмаһын ине. Юғиһә, русса әйткәндә, "изге урын буш булмай" бит.**

## АРАЛАШЫУ - КӨН ТАЛАБЫ

**Ошо көндәрҙә Йошкар-Ола ҡалаһында Милли китап фестивале сиктәрендә Рәсәйҙең Волга буйы федераль округы төбәктәре һәм фин-угыр территориялары вәкилдәре ҡатнашлығында "Сикһеҙ китап донъяһы" тип аталған китап күргәҙмәһе - йәрминкә булып үтте. Сарала Зәйнәб Биишева исемендәге "Китап" нәшриәте лә әүҙем ҡатнашты.**

Маҡсаты төбәктәрҙә иң яҡшы нәшриәт проекттарын асыҡлау һәм туған телдә китап уҡыуҙы популярлаштырыу, нәшерләүселәр, китап таратыусылар, китапханалар араһында профессиональ аралашыуҙы үҫтерәү булған фестиваль сиктәрендә "Волга буйының китап мәҙәниәте донъяһы" темаһына түңәрәк ҡор ойошторолдо. Унда "Китап" нәшриәте директоры, философия фәндәре кандидаты Зөфәр Тимербулатов доклад менән сығыш яһаны. Ул, әгәр төбәк етәкселеге үҙ халҡын мәғрифәтле итеүҙе хәстәрләһә, урындағы авторҙарға ярҙам итеү, край һәм уның билдәле кешеләре турағында белемде таратыу турағында уйлаһа, ул үҙ әҙәбиәтселәренең китаптарын, край хаҡында әҙәбиәт баҫтырыуға аҡса табасаҡ, тип билдәләне. Шулай уҡ сығыш яһаусы Рәсәйҙә нәшриәттәрҙең китап һатыу өлкәһендә артабан берләшеүе аспекттарына ҡағылды. Бында төп бәлә - автономлыҡ. Ни өсөндөр беҙ Өфө һәм өфөләләр турағында китаптар Калуга һәм Яҡутстан халҡына, һәм, киреһенсә, улар турағындағы китаптар беҙҙең халыҡҡа ҡыҙыҡ булмаҫ, тип уйлайбыҙ. Ошо төбәкләшеүҙе бөтөрөп, заманса мәғлүмәт-коммуникация технологияларҙы файҙаланып, нәшриәттәрҙең тәү сиратта китап һатыу өлкәһендә берләшеүенә табан аҙым яһарға кәрәк, тип һыҙыҡ өҫтөнә алды Зөфәр Мөхтәр улы.

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы

## Баш ауыртһа



Атеросклероз булып баш ауыртһа, ҡолаҡтар шаулаһа, ҡан баҫымын нормаға килтерергә кәрәк. Бының өсөн 20 грамм клеверҙы һауытҡа һалып, өҫтөнә ярты литр 40 градуслы спирт ҡойоп, бүлмә температураһында 10 көн ҡараңғы урында тотҡас, төшкө аш йәки ятыр алдынан 20 мл (4 балғалаҡ) эсергә.

## Витаминлы битлек

1 ҡалаҡ миләште иҙеп, бал менән болғатырға һәм биткә һылап, өҫтөнә марля ҡаплап, таҫтамал менән ябып ятып торорға. 15 минуттан һуң йылы һыу менән йыуып, төшөрөргә.

## Тәмәке тартыуҙы ташлау

❖ 1-әр ҡалаҡ әлморон, татлы тамыр (корень солодки), арыҫлан ҡойроғо (пустырник), бесәй үләне (валериана) алып болғатырға һәм 2 ҡалаҡ ҡатнашманы термосҡа һалып, 1 литр ҡайнар һыу ҡойоп, бер аҙ тотҡас, төшкө аштан һуң башлап, йоҡларға ятҡансы стаканлап эсергә.

❖ 1-әр балғалаҡ татлы тамыр, һары мәтрүшкә, эт дегәнәге (череда), ярты балғалаҡ ҡыҙыл көртмәле (брусника) япрағын алып, 1 стакан ҡайнар һыу менән термоста тотҡас, 10-14 көн буйына көнөнә ике-өс тапҡыр ярты-шар стаканлап эсергә

## Һуған

Баш ауыртһа ла, һыуыҡ тейһә лә яңы ғына һығып алынған 1 өлөш һуған һутына 2 өлөш һөт ҡушып, көнөнә ун тапҡыр танауға 3-4 тамсы тамыҙһаң, сирегеҙ ҙә, баш ауыртыуы ла һыпырып алғандай юҡҡа сыға.

## Яман шеш

Яман шешкә ҡаршы иң көслө йәшелсә - брокколи. Уның шытымдарында файҙалы матдәләр, шул иҫәптән яман шеште булдырмауы глюкорофанин да күп. Был йәшелсәне бешерелгән картуфҡа, башҡа йәшелсәләргә, ҡаймаҡҡа ҡушып ашаһаң да, үҙенән генә пюре эшләп аш итһән дә була.

**Флора БИКЕМБӘТОВА.**

*✓ Хәҙер инде ул: "Рәхмәт һеҙгә! Әсәйем күптән гүр эйәһе, ә мин аят уҡытаһы урынға, гонаһ ҡылып, күпме кешене рәнйетеп йөрөгәнмен", - тип илай. Тимәк, күптәр аңламай, уйламай эшләй ошондай оло гонаһ.*



АҒИНӘЙ҆ҺҮҘЕ

# ОЛО БУЛА БЕЛӘЙЕК,

## йәштәргә терәк булайыҡ…

**"Киске Өфө"нөң һуңғы һандарының береһендә әүҙем йәштәребеҙ Илнур Ҡотләхмәтов һәм Дим Вәлиев менән әңгәмә ҡоролдо. "Йәштәребеҙ араһында айыҡлыҡ моделе бар, тик ата-әсәләрҙең ҡайһы берҙәре ошоно ҡабул итмәй",- тине улар. Ни тиклем аяныслы һүҙҙәр. Ололар күп осраҡта тәртипһеҙлекте үҙҙәре башлай шул. Ата-әсә үҙе эскәс, нисек балаһына "Эсмә!" тийә алһын?**

Мин намаҙға баҫҡас, бер мәл туйҙарға, тыуған көн мәжлестәренә йөрөмәй башланым. Туғанлыҡ ептәре өҙөлә икәнен тойғас, былай булмай, тип, саҡырыуҙарҙан баш тартмаҫҡа булдым. Тәүҙә, ала ҡарға кеүек ултырмайым әле, тип, яулыҡ бәйләмәй йөрөгәйнем. Ҡайһы берәүҙәрҙең эсмәгән кеше янында ултырырға тартына икәнен һиҙеп ҡалдым да, мәжлескә яулыҡ ябынып бара башланым. Мосолман кейеме, ысынлап та, эсергә әүҙемдәрҙе, нисектер, һиҫкәндерә.

Быйыл бер юбилей мәжлесендә тамада: "Әсәйҙәр өсөн эсәйек", - тип тос әйтте. Үҙе мине күҙәтә. Минең күҙҙән йәштәр ағып китте. Шул тиклем ғәрләндем "Әсәйҙәр өсөн эсәйек" тигән һүҙҙәрҙән. Һүҙһеҙ генә йәштәремде һөртәм. Кисә тамамланғас, тамада яныма килеп: "Ниңә күҙҙәрегеҙгә йәш төйөлдө, әллә яңыраҡ әсәйегеҙҙе юғалттығыҙмы?" - тип һораны. Ипләп кенә башҡорт әбей-бабайҙарының эсмәүен, әсәйҙәр өсөн эсеү иң ҙур гонаһ булыуын әйттем, ғөмүмән, быңдай тостарҙы башҡа бер ерҙә лә әйтмәүен үтендем. Хәҙер инде ул: "Рәхмәт һеҙгә! Әсәйем күптән гүр эйәһе, ә мин аят уҡытаһы урынға, гонаһ ҡылып, күпме кешене рәнйетеп йөрөгәнмен", - тип илай. Тимәк, күптәр аңламай, уйламай эшләй ошондай оло гонаһ, тәртипһеҙлектәрҙе. Мәжлестәрҙә бер нисә эсмәгән кеше булһа, "теге әүҙемдәрҙе" һүндерергә булыр ине.

Ололарға әйтер һүҙем шул: намаҙға баҫтыҡ, тип, өйҙә ултырмай, өлгө күрһәтеп, кеше араһында йөрөргә кәрәк. Яулыҡ ябынып, оҙон еңле күлдәк кейеп йөрөй башлағас, үҙемә ҡыйын кеүек ине, әммә урамда ике йәш егет килеп: "Их, башҡорт инәйе! Һаумыһығыҙ, хәлдәрегеҙ нисек? Ниндәй матур башҡорт инәйҙәренең кейеме!" - тип, ике ҡуллап күрешеп киткәс, ҡыуаныуымдың сиге булманы. Тимәк, йәштәр беҙҙе, инәйҙәрҙе, шулай күрергә теләй. Инәй, олатай, бабай була беләйек! Йәштәргә терәк булайыҡ!

### Ололарға әйтер һүҙем

Тәүбә ҡылып, һиҙәйәтле юлға баҫып,
Ҡулға алып Ҡөрьән Кәрим үә тәсбих.
Асылға ҡайтһаҡ ине башҡорт булып,
Өйрәнеп шәжәрә, уҡып хәҙис, тарих.

Эсеү - гонаһ, ташлайыҡсы араҡыны,
Аҙа халыҡ, шаша бәндә, иман юҡ.
Эскән ерҙә, эскән илдә киләсәк юҡ,
Күрһәтмәйек йәштәргә яманлыҡ.

Булып үрнәк, аҡ бабайҙар, аҡ әбейҙәр,
Булмышы тип башҡорттоң - айыҡлыҡ.
Күрһәтәйек йәштәргә матур өлгө,
Иман, зиһен, әҙәп һәм тыйнаҡлыҡ.

Араларҙа күп бит әле зыялылар,
Мохтаж ҡурсыу, һаҡлауға еребеҙ.
Дауам итер башҡортлоҡто зиһенлеләр,
Иҫән саҡта хәтер, тел, илебеҙ.

Уян, башҡорт! Күп йоҡланың, баҡ яҡтыға,
Тарих саңы булды күп ҡәүемдәр.
Зыялылар баҫһа сығып алғы сафҡа,
Көрәшерлек әле халҡым хәлең бар.

Һеңдерәйек йәштәргә Аҡмулла һүҙен,
"Арабыҙҙа наҙандар күп, уҡыу һирәк".
Илебеҙҙә яман, иблис байтаҡ әле,
Еңеү өсөн белем кәрәк, уҡыу кәрәк.

Замандаштар әйтер һүҙем ошо һеҙгә:
Емерелһә рухи донъя, донъя бөтә.
Ата-баба тотҡан юлды табып,
Юл башлайыҡ, йәштәр беҙҙән шуны көтә.

**Фәүзиә ЙӘНТИЛИНА.**
**Мәләүез ҡалаһы.**

ЙӘШТӘР ҺҮҘЕ

**Мөһим бер саранан ситтә ҡалғанмын, тип үкенеп бөтә алмайым. Ишембай ҡалаһы һәм районы йәштәренең ошо көндәрҙә үткән ҡоролтайында ҡатнаша алманым. Йәш һәм йәштәр тормошона битараф булмаған кеше булараҡ, был сарала ҡайһы бер фекерҙәрем менән мин дә бүлешер инем. Шулай ҙа, район гәзитендә баҫылған репортаждан был сараның эстәлеге менән танышҡандан һуң, уға ҡағылышлы фекерҙәремде яҙма рәүештә еткерергә булдым. Ишембай йәштәренең тәүгеләрҙән булып үҙ ҡорон йыйырға баҙнат итеүе бары хуплауға лайыҡ. Бында йәмғиәт үҫешендә йәштәр хәрәкәтенең әһәмиәтен аңлаған һәм хуплаған урындағы хакимиәттең роле лә ҙур, тип уйлайым. Урынбаҫарҙары менән бергә хакимиәт башлығы Марат Хөсәйен улы Ғайсин үҙе лә ҡатнашҡан, сығыш яһаған бит ҡорҙа, киләсәктә йәштәрҙе йәмғиәтте һауыҡтырыу буйынса бергә эшләргә саҡырған. Шулай уҡ саҡырылған ҡунаҡтар араһында республикала бик популяр булған гәзиттәребеҙҙең береһе "Киске Өфө"нөң баш мөхәррире Гөлфиә Янбаева, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе урынбаҫары Фәнзил Әхмәтшин, Ҡоролтайҙың йәштәр менән эшләү буйынса комиссияһы рәйесе Тимур Лоҡманов булыуы сараның мөһимлеген тағы ла бер тапҡыр дәлилләй. Районыбыҙҙың төрлө ауылдарынан килгән йәштәрҙе берләштереү һәм улар алдында торған мәсьәләләрҙе хәл итеүҙә ҡоролтай үҙ ролен мотлаҡ уйнар. Бында Тимур Лоҡмановтың: "Йәштәр советы киң формат алырға, уның тармаҡтары һәр район, ҡалала, һәр мәктәптә булдырылырға тейеш", - тигән һүҙҙәренә баҫым яһар инем. Һәм беҙгә ошо маҡсатты тормошҡа ашырыу өсөн күп көс һалырға тура киләсәк. Ә әлегә ҡоролтайҙа күтәрелгән ҡайһы бер мәсьәләләргә айырым туҡтап, байҡау яһап үтергә теләйем.**

# АТЫП ҠАЛҒАНСЫ,

## ятып ҡалыуҙы… хуп күрмәйек

### Тәрбиә ғаиләнән башлана

Йәштәребеҙ араһында алкоголизм, наркоманлыҡ кеүек насар ғәҙәттәр (ғәҙәт кенә түгел, афәттәр!) таралыуы ҡоролтайҙа күтәрелгән мәсьәләләрҙең береһе булыуы тәбиғи. Был тема бар яҡлап йәмғиәттә ҡыҙыу бәхәстәр тыуҙыра. Әммә эт олой тора, бүре йөрөй тора, тигәндәй, шешә һәм наркотик ҡолона әйләнгән йәштәр аҡылына килергә бик ашыҡмай. Бында эш был афәттән ҡотолоу юлдары һөҙөмтәле булмауҙа түгел, ә ныҡышмалылыҡ һәм берҙәмлек етешмәүҙә. Айырыуса ата-әсәләр яғынан. Балаларының насар ғәҙәттәргә бирелеүендә улар үҙ ғәйебен бик танып бармай.

Нимә ул араҡы, наркотик, никотин? Улар яһалма рәүештә ыңғай эмоциялар тыуҙырыусы, кешегә ваҡытлыса рәхәтлек хисе биреүсе матдәләр (ололар ҙа тап ошо маҡсатта уларҙы ҡуллана). Тимәк, насар ғәҙәттәргә бирелгән йәшелкенсәк ғаиләлә алып еткермәгән ыңғай эмоцияларҙы шулай тулыландыра. Тимәк, ололарҙан, иң беренсе ата-әсәнән, нимә талап ителә? Балаларыңды ихлас(!) яратыу, шул яратыуыңды һәр ваҡыт белдереү һәм уларҙы үҙ аллы шәхес булараҡ ҡабул итеү!

Тәрбиә ғаиләнән башлана. Был һүҙҙәрҙе уңайы тура килгән һайын ҡабатларға яратһаҡ та, ғиләһенә төшөнөп етмәйбеҙ, ахыры. Бөтә атай-әсәй был хәҡиҡәтте таный, әммә үҙенә ҡағылышлы икәнен аңғармай. Әгәр аңлаһа, ошо хәҡиҡәт артынан барһа, йәштәребеҙҙең насар ғәҙәттәргә ылығыуы күпкә кәмер ине. Шулай түгелме ни? Сөнки бар белгестәр балаларҙың ололарға, тәү сиратта, ата-әсәһенә эйәреп йәшәргә өйрәнеүе хаҡында тылҡый. Бөгөнгө көндә бер байрам эскеһеҙ үтмәй. Йәш быуындың аңында күңел асыу - ул һәр ваҡыт спиртлы эсемлектәр менән бәйле икәнлеге ныҡлы урын ала шулай. Бөгөнгө ата-әсәләргә тәрбиә менән айырым шөғөлләнергә ваҡыт табыуы ла ҡыйыныраҡ (бында һылтауҙар мең төрлө булырға мөмкин, көнө буйы эштәмен, ваҡыт юҡ, бала менән нимә эшләргә белмәйем, ул өйҙә тормай һ.б.), үҙ ыңғайына бирелгән бала сит йоғонтоға бирешеүсән булып үҫә. Шул иҫәптән насар ғәҙәттәргә лә.

Ә инде Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе урынбаҫары Фәнзил Тәлғәт улы Әхмәтшиндың "Айыҡ ауыл" тигән конкурс иғлан итергә саҡырыуы иғтибарға лайыҡ. Йәмғиәтебеҙҙе сәләмәт тормошҡа ылыҡтырыуҙа бик шәп буласаҡ, минеңсә.

### Уйҙарың уңышҡа көйләһен

Йәштәрҙе эшҡыуарлыҡҡа ылыҡтырыу кеүек мөһим мәсьәлә күтәрелеүе лә - заман талабы. Булдыҡлы йәштәр етерлек арабыҙҙа. Эх, үҙ эшеңде асһаң ине, тип күптәр хыял итә. Уларҙы бер аҙ ойоштороп, этәргес көс биреп тигәндәй ебәрергә кәрәктер. Сөнки хыял итеү - бер, ә уны тормошҡа ашырыу - икенсе. Улар нимәнән башларға, ҡайҙа барырға, кемгә мөрәжәғәт итергә, был йәһәттән ниндәй льготалар барлығын белмәй. Изге ниәттәр шулай шик-шөбһәләр, баҙнат итмәү, ҡыйыуһыҙлыҡ бизмәнендә йотолоп ҡала. Үкенескә ҡаршы, атып ҡалғансы, ятып ҡалыуҙы хуп күрә йәштәребеҙ. Кемдер ата-әсәһенең иҫәбендә ятыусы "паразит"ҡа әйләнә, кемдер һис бер ҡасан килмәҫ "иртәгә" менән йәшәй, кемдер был донъянан нимә телә-



Ишембай районы йәштәре ҡоролтайы советы ағзалары ҡунаҡтар менән.

гәнен аңлай алмай. Әлеге лә баяғы, ғаиләләге тәрбиә һөҙөмтәһе был. Беҙҙең күптәребеҙ тормоштағы ҡыйынлыҡтарҙы теге йәки был сәбәпкә һылтарға ғәҙәтләнгәнбеҙ: эш юҡ, йә эш хаҡы әҙ, йә етәксе ҡәбәхәт, йә заманаһы ауыр, бар нәмә ҡиммәт, власть - шайтандар ояһы, өйҙә лә мине аңламайҙар.... Был - тулыһы менән уңышһыҙ кешенең комплексы.

Бындай уйҙар менән уңышҡа ирешеү мөмкин түгел. Тормошҡа ҡулланыусы булараҡ ҡына ҡараһаң, ул да һине "куллана". Шуға ла уңышҡа ирешергә теләгән кешенең тәүге уйы "Мин был донъяға нимә бирә алам?" тигән һорау булырға тейештер. Ошо һорауға яуап тапһаң, уны именлек һәм бәхет сығанағы( шул иҫәптән килемле лә) итеү мәсьәләһе алға баҫа. Был универсаль ҡанун һәм йәшәйешебеҙҙең теләһә ниндәй өлкәһендә ҡулланыла ала.

Эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнергә теләүселәр өсөн Өфөлә төрлө курстар ойошторолоп тора ул. Шундай уҡ курстарҙы һәр районда ойошторһалар, ҡалай шәп булыр ине. Урындағы билдәле эшҡыуарҙарҙы саҡырып, тәжрибәләре, нисек эш асып ебәреүҙәре, ниндәй ҡыйынлыҡтарға осрауҙары хаҡында һөйләтһәк, насармы ни?

Район гәзиттәрендә эшҡыуарлыҡҡа бағышланған рубрика асып ебәрһәләр, иш янына ҡуш булыр ине. "Иң яҡшы бизнес-план " тигән конкурстар ҙа хәҙер популяр. Әйҙә, ҡоролтайҙа тәҡдим ителгәнсә, атабабаларыбыҙҙың бороңғо кәсептәрен заман талаптарына яраҡлаштырып, килем алыу ысулдарын эҙләп ҡараһындар. Районыбыҙҙың билдәлекле йәш эшҡыуарҙарының береһе Рәил Әхмәтйәновтың ҡоролтайҙағы сығышында әйткән һүҙҙәре менән килешмәй булмай: "Эшҡыуарлыҡ - киләсәгеңә үҙ аллы юл ярыу".

Өҫтәп шуны әйтер инем, ниндәй өлкәлә генә эшләһәгеҙ, ниндәй генә маҡсаттар менән йәшәһәгеҙ ҙә, киләсәгегеҙ һис бер нәмәгә ҡарамай үҙ ҡулығыҙҙа икәнлегенә ышанығыҙ, йәштәр! Сөнки һеҙ йәмғиәтебеҙҙең иң өлгөр, иң сағыу, иң амбициялы ҡатламы!

### Нөктә ҡуйыр алдынан...

Ҡоролтайҙа күтәрелгән проблемалар былар ғына түгел, әлбиттә. Мин уларҙың иң мөһимдәренә генә (үҙемдең күҙлектән) бер аҙ ҡағылып үттем. Сөнки районыбыҙҙың сәскә атыуын теләһәк, йәштәргә таянырға кәрәк икәнлеге көн кеүек асыҡ. Иң беренсе сиратта, һәр район хакимиәтендә, ауыл биләмәһе советтарында йәштәр менән эшләү буйынса бүлектәрҙең эшен әүҙемләштерергә, уларҙы урындағы йәштәрҙе ойоштороу эшенә ныҡлап ҡушырға кәрәк. Минеңсә, улар был юҫыкта эштәрен бик һүлпән алып бара. Ауыл мәҙәниәт һарайҙары һәм клубтары саралар берлектә ниндәй ҙә булһа саралар үткәреү уларҙың ҡулынан килерлек бит!

Тағы ла шуны өҫтәп әйтер инем. Саралар булып тора (Аллаға шөкөр, һылтауҙар етерлек), тик ҡайһы берҙәре шунда уҡ онотола. Ишембай йәштәренең тәүге ҡоролтайы һуңғылар исемлегенә кермәй, йәштәребеҙҙең генә түгел, бар район халҡының тормошонда яңы матур һәм файҙалы башланғыстарға нигеҙ һалыр, тигән өмөттәмен.

Гөлшат ХАЖИЕВА-НУРДӘҮЛӘТОВА.
Ишембай районы.

*ТУҒАНЫМ...*

# ЕТЕ ЯТТАР - ЯТ БАУЫР,

## үҙеңдекенә таян һәм таяныс бул

**Тарихыбыҙға күҙ һалһаҡ, һәр осорҙа, һәр быуын алдына ниндәйҙер ҡаршылыҡтарҙы еңеп сығыу бурысы ҡуйылған. Атай-олатайҙарыбыҙ йөҙәр йыллап ер, ил өсөн көрәшһә, бөгөнгө быуынға эскелеккә, динһеҙлеккә, алама ғәҙәттәргә, шулай уҡ булмышыбыҙҙы юҡҡа сығарып, телде, мәҙәниәтте, йәшәйештә бер иш итергә ынтылған, бөтә халыҡты тиңләү маҡсатына йүнәлтелгән көстәргә ҡаршы торорға кәрәк. Ә ҡаршы тороу беҙ берҙәм булғанда, туғанлыҡты өҫкә күтәргәндә генә мөмкин икәнен яҡшы беләбеҙ.**

Асылыбыҙ нигеҙен тәшкил иткән илһөйәрлек, кешелеклелек сифаттарын иҫкә төшөрөү мөһим. Һуңғыһы иң тәүҙә туғанлыҡ мөнәсәбәтендә асыҡ сағыла. Киң күңеллелек, яҡын кешеңдең кисерештәрен үҙеңдеке кеүек ҡабул итә белеү, ауыр хәлдә ҡалған туғанына ярҙам ҡулы һуҙыу халҡыбыҙҙа элек-электән изге бурыстарҙан һаналған. Юҡҡамы ни быуаттар буйы йыйылған халыҡ аҡылын туплаған ауыҙтел ижадында "Туғаныңдан биҙмә - нәҫелең ҡорор", "Ике туған талашыр, атҡа менһә - ярашыр", "Ике бармаҡ араһына ит үрмәй, туған туғанһыҙ көн күрмәй", "Туғандарҙың татыулығы байлыҡтан артыҡ" кеүек мәҡәлдәр киң таралған. Улар ғәйәт ҙур тәрбиәүи әһәмиәткә эйә. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ҡала мөхитендә был фекерҙәр йыш иңғырамай, ауылдарҙа ла һәр һүҙен мәҡәл менән йөпләп ҡуйыусы оло быуын кешеләренең сафы һирәгәйә. Ә бит туғанлыҡ хисе нигеҙе, башҡа бик күркәм сифаттар менән бер рәттән, ғаиләлә һалынырға тейеш. Әлбиттә, һүҙ менән генә түгел, ә эш, йәшәү рәүеше менән. Ошо урында үҙ нәҫелемдәге мөнәсәбәттәргә туҡталып үтәйем. Ауырғазы районы Мораҙым ауылында тыуып үҫкән мең ырыуы ҡыҙымын мин.

80 йәшен теүәлләгән, бөгөн дә ергә ныҡ баҫып йөрөгән атайымдың бер туған ағаһы бабайым Мозайыр Вәлитов һөйләүенсә, элек туған-тыумасабыҙ граждандар һуғышына китеп юғалған ағай-энеләре балаларын, һәр ғаиләгә таратып, үҫҙәре үҫтергән. Олатайым менән өләсәйем Ғирфан исемле малайҙы ҡарауға алған, аслы-туҡлы йәшәгән саҡтарында "үҙемдеке, бауыр кисәгем" тип шул баланы үҙенекеләрҙән айырмай тәрбиәләгән. Заманының башҡа ир-егеттәре кеүек, Ғирфан да үҫеп еткәс Бөйөк Ватан һуғышына алына һәм иле өсөн ғүмерен бирә.

Беҙ үҫкәндә ике ғаилә бер ихата эсендә урынлашҡан ике йортта йәшәнек, ҡапҡабыҙ берәү ине. Ағалы-ҡустылы бер туғандар йәнәш йорт һалып, бер-береһенә терәк булырға теләгәндән шулай хәл ителәндер. Оло ағайҙа - һигеҙ бала, кесеһендә - етеү, йорттар ҙа хәҙерге кеүек иркен түгел. Ҡайһы өйҙә тәмле ризыҡ бешерһәләр, беҙ, бала-саға, эркелешеп, шунда йүгерә инек. Балалар үҙ-ара ниҙер бүлешкәндә, ризаһыҙлыҡ белдергәндә хәтерләмәйем, күрәһең, өләсәйҙәр тәрбиәһе көслө булғандыр. Өләсәйем, уның ҡарт әсәһе ҡарт өләсәйебеҙ ҙә алмашлап ике арала йәшәне (олатай Сталинград янында барған бәрелештә һәләк булған).

Уртаҡ ишек алдында буй еткергән балалар бөгөн төрлө тарафта көн итәбеҙ, туғанлыҡты бөтәһенән өҫтөн күреп, шатлыҡ-ҡайғыларҙы бүлешеп ғүмер кисереүебеҙ менән атай-әсәйҙәргә бурыслы булыуыбыҙҙы яҡшы аңлайбыҙ.

Туғандар берҙәм, үҙ-ара ярҙамлашып йәшәгән аймаҡтарҙа башҡаларға үрнәк булырҙай лайыҡлы йәшәүселәр күберәк, киреһенсә, тарҡаулыҡ, күрә алмаусылыҡ хөкөм һөргән ерҙә бөлгөнлөк, уңышһыҙлыҡ йыш осрай.

Ауыл кешеһе бер-береһенең тын алышын һиҙеп йәшәй. Беҙгә урам аша бер ағай менән апай биш балаһы менән ғүмер итте. Иң оло улдары әсәһен дә, туғандарын да ҡыйырһытты. Уның менән бер йортта йәшәй алмағас, кесе ҡустыһы ҡайҙалыр ситкә сығып китте. Әсәләре гүр эйәһе булды. Ҡыҙҙары кейәүгә китеп, аталы-уллы ғына ҡалғас та был ғаиләлә тыныслыҡ һиҙелмәне, "төшөрөп" алып, үҙ-ара ыҙғыштылар. Шулай бер көндә өйҙәре янып юҡҡа сыҡты, күп тә үтмәй, улы ла донъя ҡуйҙы. Колхоз биргән тимер вагонда үҙе генә көн иткән ағайыбыҙ үткән ғүмерен барлағанда был бәхетһеҙлектәрҙең башы ҡайҙан килеүен, моғайын, төшөнәләр. Күрше-күлән араһынан оло йәштәгеләре "ул үҙ әсәһен ҡәҙерләмәне" тигән һүҙҙәр ишеттерҙе. Ни сәсһәң, шуны урырһың, тиҙәр бит.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**III Бөтөн Донъя башҡорттары ҡоролтайы делегаттарының халҡыбыҙға мөрәжәғәтендәге "Беҙ - туғанлыҡ тойғоһо көслө милләт... Билдәле тәбиғәт ҡанунын иҫендә тот: туғанын ҡәҙерләмәгән үҙе лә ҡәҙерһеҙ булыр", - тигән юлдар һеҙгә таныштыр. Ҡан-ҡәрҙәштәргә йылы мөнәсәбәт кенә аҙ. Милләтебеҙҙең һәр вәкиленә туған итеп ҡараүҙы бурыс итеп ҡуйһаҡ оло йыйын. Әлбиттә, бындай сифат беҙгә электән дә ят түгел ине, әммә бөгөн ул айырыуса кәрәк. Был ҡараш дәрәжәлә, вазифа биләгән милләттәштәребеҙҙең күңел түренән дә урын алһын ине.**

Айһылыу МОРАҘЫМОВА.

*АҒИНӘЙ ҺҮҘЕ*

# АҠЫЛЛЫ ҒЫНА...

## эшеңде көйләр, фәһемле һүҙ һөйләр

• Кеше күңеле - тәрән мөғәрәп, баҫҡыс ҡына ҡуя бел, бөтә байлығын сығара.

• Кешене бер алдаһаң, аҡшайып ҡарар; ике алдаһаң, тешен ыржайтыр; өсөнсөһөндә сөрсөтә һуғыр - алдашыуҙан алыҫ бул.

• Вайымһыҙ һәм ғәмһеҙ булма - икеһе лә ҡаза килтерә.

• Кеше зарына ҡолаҡ һал - балыҡ ҡына бер ни ҙә ишетмәй.

• Һәр ерҙә дуҫым бар, тип арҡаланма, арҡауҙың да арҡан кейҙереүе ихтимал.

• Бәләсниккә тарыма - ғүмер буйы сәйнәр, аҡыллыға юлыҡһаң, эшеңде көйләр, фәһемле һүҙ һөйләр.

• Донъям теүәл булһын, тигән ҡатындың башында ҡырҡ төрлө уй, ҡулында йөҙ эше уйнар.

• Эш юлында эшеңде, ҡайтыуында өйөңдө ҡайғырт.

• Теленде насар һүҙҙәрҙән һаҡлау өсөн яҡшыларын йышыраҡ әйт.

• Тарих тирмәнен кирегә әйләндереүселәргә эйәрмә - онталҡанға әйләнеүең бар.

• Боҙолған көйөңде тышҡа сығарма, иртәгеһе көндөң матурлығын уйла.

• Күп белергә теләйем, тип, күп төпсөнмә, кешене маҙаһыҙлама - эштә лә, һүҙҙә лә сама белеү хәйерле.

• Кешенең кеше аш янында һәм мал булғанда беленә, нәфсеңде тыя бел.

• Ҡунаҡсыллыҡ - матур ғәҙәт, әммә әйләнгән һайын килеп маҙаһыҙлаған әрһеҙ кешене гел ҡунаҡ тип булмай.

• Тормошта эш ҡыра алмаған ошаҡсы һәтемтәйҙәр һәр саҡ була - һаҡ бул, уларҙың ағыуы йыландыҡынан көслө.

• Ҡайғыға төшкән кеше күңеле - тетен тулған өй, тәрәләрҙе ас, йәғни ҡайғылыны бөгөләп төшөүҙән ҡотҡар.

• Ғүмер - серле йомғаҡ, асылмаған йоҙаҡ: ярағаи асҡыс тапһаң ғына серен асырһың, дөрөҫ йәшәү юлын табырһың.

• Йүнле һәм йүнсел бул - йүнгә тартыр, малың артыр, йүнһеҙлек иһә сәс ағарта, донъя вата, артҡа тарта.

• Күкрәк һуғып, аяҡ кипеп, ҡара-ҡаршы ирешкән кешеләр ике эт өрөүенә тиң.

• Атың юлда арыһа, әрләмә, ҡамсылама - келәттәге һолоңдо ғына йәлләмә.

• Нәфсеңде тый, донъя ҡыума: донъя малы дуңғыҙ ҡаны, һыу сепрәге - ҡайҙа күмһән, шунда серей.

• Аҡса, тип йәнең атма, исемең һатма: аҡса һуҡырға тиң, ҡайҙа төртһәң, шунда бата, үҙеңде лә бергә һөйрәй.

• Егәрле бул, егәрлеләр алға елә ҡаршылыҡтың еңә-еңә.

• Үсекмәгеҙ: үсеккән ир - ил сире, үсеккән ҡатын - өй сире.

• Йүнһеҙ бала ата-әсәһен талаштыра, йүнһеҙ ир бөтә ҡәүемен һуғыштыра.

• Ваҡҡа көйләнгән тирмән һәр саҡ ваҡ тартҡандай, ваҡсыл кеше лә ғүмер буйы ваҡ була, теңкәгә тейә.

• Алабарман булма - уның бар эше бергә болғана, осона ла сыға алмай, аҡыллылыҡты мәрйендәй теҙелеп кенә тора.

• Ҡулдарыңа хужа бул - гел алырға түгел, бирә лә белһендәр.

• Ҡунаҡҡа барғанда йөҙөң, һүҙең, ҡылығың үлсәүҙә булһын - улар кемлегеңде күрһәтә.

• Йәшәйештең алтын ҡалыбынан сыҡма - боҙоҡлоҡҡа бер аҙым ғына икәнен онотма.

Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.

# ӨФӨ – ТАУҘА, УНДА

## Ә Стәрлетамаҡ

**Зәйнәб Биишева исемендәге Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия академияһы ойошторолоуға быйыл 70 йыл тулды. 1940 йылдың 22 июнендә РСФСР Халыҡ Комиссарҙары Советының 463-сө ҡарары нигеҙендә Стәрлетамаҡ башҡорт педагогия училищеһы тип асылған был уҡыу йорто ошо йылдар эсендә данлыҡлы юл үтеп, академия кимәленә күтәрелде. Ошо уҡыу йортондағы тормош, ғөмүмән, хәҙерге заманға бәйле уҡытыу-тәрбиә мәсьәләләре хаҡында академияның технология һәм эшҡыуарлыҡ факультеты деканы, физика-математика фәндәре кандидаты Зөлфиә ЙӘҒӘФӘРОВА менән башҡорт филологияһы факультеты деканы, филология фәндәре кандидаты, доцент Зөһрә СӘЛИХОВА әңгәмәләшә.**

**▸ Һеҙ совет осоронда юғары уҡыу йортонда уҡығанһығыҙ. Үҙегеҙҙең ошо уҡыу йорто миҫалынан сығып, ул ваҡыттағы студент хәҙерге студенттан нимәһе менән айырыла, тип уйлайһығыҙ?**

**З. СӘЛИХОВА:** Беҙ уҡыған саҡта студенттар үҙаллыраҡ ине. Ата-әсәйҙәр ҡайҙа, ниндәй шарттарҙа, нисек уҡығаныбыҙҙы ла белмәй ине. Аҡсаны ла тота белдек, 40 һум стипендия барыһына ла етә ине. Хатта өйгә күстәнәс ебәрергә лә аҡса ҡала ине. Уҡыуға етди ҡараныҡ. Уҡыуҙан тыш төрлө сараларҙа ла ҙур теләк менән ҡатнаштыҡ. Йәй төҙөлөш отрядтарында аҡса эшләп, ҡышҡылыҡҡа кейем алырға мөмкинселек тә була торғайны.

Бөгөнгө студенттар ата-әсәһенә ныҡ бәйле. Ата-әсәһе ҡалаға килеп, уларҙы ятаҡҡа урынлаштыра, контролдә тота. Сөнки хәҙерге студенттарҙың психологияһы бөтөнләй икенсе. Улар балалыҡтан сығып бөтмәгән һымаҡ. Әлбиттә, бөтә студенттар ҙа улай түгел, әммә күпселек тап шулай. Беҙҙең студенттар араһында Президент, Аҡмулла, Вәлиди исемендәге стипендиаттар ҙа, илке-һалҡы ғына йөрөгәндәре лә бар. Икенсе төркөмгә ҡараған студенттар: "Яҡшы уҡыһам да, насар уҡыһам да, барыбер диплом аласаҡмын", - тип иҫәпләй. Бер ни менән дә ҡыҙыҡһынмаған студенттар йылдан-йыл күбәйә бара. Уларҙы "уятыуы" ауыр. Ата-әсәләрен саҡыртып та ҡарайбыҙ - фәтеүә юҡ. Бәлки, был юғары уҡыу йортона осраҡлы килеп эләккән студенттар күплегенән дә киләлер, коммерция бүлектәренә теләгән берәү инә ала бит хәҙер.

**З. ЙӘҒӘФӘРОВА:** Бөгөнгө студенттар - практиктар. Беҙ һауала оҫҡан романтик инек. Мәҫәлән, әле беҙҙең факультетта бер юлы уҡып та, эшләп тә йөрөгәндәр бар. Уҡыуын да, эшен дә яҡшы алып бара алған студенттарҙы маҡтарға кәрәк. Ауыл балалары был тәңгәлдә ауырыраҡ ҡуҙғалыусан. Ҡаланыҡылар - сосораҡ. Дәрескә уяна алмай, йоҡлап ҡалыусылар ҙа бар. Ундайҙарҙы ҡайһы саҡ уятып та йөрөргә тура килә. Әйтергә кәрәк, хәҙерге ата-әсә балаһына яҡшылыҡ теләп, уға "теплица шарттары" тыуҙыра, һөҙөмтәлә улар үҙаллылыҡҡа өйрәнмәй үҫә.

Элек юғары уҡыу йортона иң көслөләр һәм иң тырыштар ғына инә ала ине. Хәҙер һәр кластан 90 проценты уҡырға инә. Егерме йыл элек Стәрлетамаҡ ҡалаһында ике юғары уҡыу йорто - Нефть-техник университеты һәм Стәрлетамаҡ педагогия институты ғына булһа, хәҙер төрлө филиалдар асыла. Мин хатта уларҙың исемен дә хәтерләп ҡала алмайым. Элек иң яҡшы студенттарҙы һайлап алырға мөмкинлек бар ине. Хәҙер юғары уҡыу йорто техникум, хатта училище кимәлендә генә тороп ҡалды.

**▸ Элек студентҡа ниндәй ҙә булһа бер һорауға яуап табырға кәрәк булһа, китапханаға бара торғайны. Унда ул тематик йә систематик каталогҡа инеп, заказ яҙып биреп, үҙенә кәрәкле китаптарҙы йә башҡа тәүсығанаҡты аҡтарып сыға ине. Бөгөн студенттар Интернетҡа ғына инә лә, бер төймәгә баҫып, шунда уҡ әҙер материал табып ала. Әҙергә-бәҙер, тигән һүҙ ҙә бар. Еңел табылғандың ҡәҙере лә булмай, тиҙәр. Шул уҡ ваҡытта кешелек ошондай технологик үҫеш йүнәлешен алғас, беҙ икенсе яҡҡа ҡайырылып китә лә алмайбыҙ. Шулай түгелме?**



**З. ЙӘҒӘФӘРОВА:** Тир түкмәй тапҡан малдың ҡәҙере булмай, тиҙәр. Мәғлүмәт, ул ҡайҙан ғына алынмаһын, әгәр ҙә кешенең тәжрибәһе менән нығытылмаһа, уның файҙаһы ла шул саҡлы ғыналыр. Мин үҙем Башҡорт дәүләт университетының физика-математика факультетын тамамланым. Әле бында технология һәм эшҡыуарлыҡ факультетында бер йыл самаһы деканмын. Беҙҙең нәҫелебеҙҙә барыһы ла уҡытыусылар булғанлыҡтан, эшҡыуарлыҡ факультетын етәкләү миңә хас түгел, тип һанай инем. Хәҙер иһә шундай фекергә килдем: беҙҙең халыҡты эшҡыуарлыҡҡа күпләп йәлеп итергә кәрәк. Ошоно аңлатыу маҡсатында үҙ эшен асҡан элекке студенттарыбыҙ менән осрашыуҙар үткәрәбеҙ. Ауылдан килгән студенттарға: "Һеҙҙең технология һәм эшҡыуарлыҡ буйынса белгес булыуығыҙҙы раҫлаусы документығыҙ буласаҡ. Шуға күрә, үҙегеҙҙең эшегеҙҙе асып ебәрә алаһығыҙ, мәктәптә уҡытыусы урыны булмаһа ла, һеҙҙең киләсәгегеҙ бар", - тип аңлатырға тырышабыҙ.

Технология үҫеше интеллект үҫешен тотҡарлаһа ла, һәр бер нәмәнең ыңғай яғы ла була. Мәҫәлән, мин ҡайһы саҡта студенттарымдан мәғлүмәт технологияларына өйрәнәм. Улар янымае килә лә: "Апай, бына бер уңайлы программа сыҡҡан", - тип, мине таныштыра һалалар. Бынан сығып, шундай йомғаҡ яһарға була: әгәр ҙә беҙ бер йүнәлештә хәрәкәт иткән поезғa ил менән ҡуша ултырғанбыҙ ҙа, шул йүнәлеш буйынса барабыҙ икән, башҡа яҡҡа борола алмайбыҙ. Шулай булғас, мәғлүмәт технологияһы үҫешенә ҡаршы бара алмайбыҙ. Әммә үҙебеҙ өсөн кәрәк нәмәләрҙе алып, матур вагонға ултырып алға бара алабыҙ бит. Студенттарыбыҙҙы шуға әҙерләп, юлды артабан дауам итергә тейешбеҙ.

**З. СӘЛИХОВА:** Кеҫә телефондары, интернет, компьютерҙар - кешенең баш мейеһе эшмәкәрлеген тотҡарлай, кеше анһатҡа һалышып өйрәнә, тиһәк тә, улар кешенең баш эшләтеү һөҙөмтәһе лә бит. Әгәр ҙә ҡасандыр тырышлыҡ һалынмаһа, бөгөн улар ҙа булмаҫ ине. Икенсенән, әгәр ҙә төрлө аппараттар, приборҙар килеп сыҡмаҫтай булһа, кеше нимәгә башын эшләтергә тейеш? Бында таяҡ ике осло, миненсә. Мәғлүмәт технологиялары үҫешенең иң ыңғай яғы: кеше хәҙер мәғлүмәт эҙләп, иң ҡәҙерле ваҡытын сарыф итмәй.

**▸ Зөлфиә Әбделхәй ҡыҙы, һеҙҙең заманды, кешелекте поезд менән сағыштырыуығыҙ бик урынлы. Әммә ҡайһы ваҡыт ул поезды бер көрсөккә йә упҡынға табан китеп барғандай ҙа тоябыҙ. Дөрөҫ, беҙ ул поездан төшөп ҡала алмайбыҙ. Шулай ҙа, үҙегеҙ әйтмешләй, бар нәмәгә битараф уҡыусыларҙы, студенттарҙы нимә менән йәлеп итеп була һуң? Эйе, "еңел табыш" ҡыҙыҡһыныуҙы бөтөрә. Бында белем алыуға һунарсы сәме юҡҡа сыға. Бына һеҙ әйткән һүҙ - таяҡтың ике яҡ осо.**

**З. ЙӘҒӘФӘРОВА:** Үлсәүҙең бер яғына нимәлер һалһаң, икенсе яғы күтәрелә. Икенсе яҡҡа ауырлыҡ һалһаң, киреһенсә, был яҡтың торошо үҙгәрә. Самаһыҙ күп һалыу менән шулай уҡ файҙа юҡ - үлсәү түңкәрелеп төшөүе мөмкин. Шуға күрә, яңылыҡты самалап ҡына, яйлап ҡына өҫтәргә кәрәктер, тип уйлайым. Гел генә "юҡ" тип, технологияларҙы ла инҡар итеп булмай. Поездан төшөп ҡалып булмай. Мәҫәлән, Англиялағы ниндәйҙер бер эшҡыуар бар нәмәһен ҡалдырып, тәбиғәттә йәшәргә киткән. Әммә үҙе менән ноутбугын алған. Ни өсөн? Үҙе былай тип аңлатҡан: "Цивилизациянан киттем. Бында мин еләк-емеш менән генә туҡланам. Шулай ҙа, башҡа ер менән бәйләнешкә сығыр өсөн компьютерымды алдым" - тигән. Эшҡыуарҙың әйтеүе буйынса, уның буш ваҡыты барлыҡҡа килгән.

**▸ Ошонда эшләп, тормош һәм эш тәжрибәһе туплаған кеше булараҡ, әйтегеҙ әле, Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия академияһының башҡа юғары уҡыу йорттары араһында тотҡан урыны нимәлә? Көньяҡ Башҡортостанда урынлашҡан интеллектуаль үҙәк ниҙән ғибәрәт?**

**З. ЙӘҒӘФӘРОВА:** Үҙем Өфөлә уҡыным, йәшлегем хәтирәләре баш ҡалаға бәйле. Ә Стәрлетамаҡ ҡалаһы элек-электән көньяҡ Башҡортостан үҙәге булған. Ул Башҡортостандың икенсе баш ҡалаһы итеп иғлан ителгән ваҡытта уҡ сәнәғәте үҫешкән ҡала иҫәпләнгән. Педагогия, медицина училищеларына студенттар уҡырға ылығып торған, нисә быуын зыялылары бында белем алған, ошонда эшкә лә ҡалған.

Стәрлетамаҡ ҡалаһы оҙаҡ йылдар Рәсәйҙең иң таҙа ҡалаһы исемен йөрөтә, раҫлай. Әлбиттә, был үҙенсәлеге иң айырылып торғанылыр. Сөнки, дин дә таҙалыҡҡа, сафлыҡҡа өндәй. Кешене уратып алған мөхит таҙа була икән - был таҙалыҡ күңелгә лә үтеп инәләр, тип уйлайым. Педагогик академия бына инде 70 йыл тирәһе ошонда белем үҙәге һанала, ҡалаға бер йәм, энергетика өҫтәй.

**З. СӘЛИХОВА:** Ысынлап та, Стәрлетамаҡ академияһы хәҙерге заманда республиканың көньяҡ районадары студенттары, абитуриенттары өсөн бик уңайлы. Финанс яғынан да был ҡала Өфө менән сағыштырғанда, отошлораҡ. Килеп-ҡайтып йөрөр өсөн ваҡыт та аҙыраҡ китә. Беҙҙең уҡыу йортонда йәшәү шарттары бик яҡшы. Йыл һайын ойошторолған конкурстарҙа уңайлыҡтар, таҙалыҡ, бөхтәлек буйынса 1-се, 2-се урындар яулайбыҙ. Ата-әсәләргә балаларын аҙыҡ-түлек менән тәьмин итеү өсөн килеп йөрөүгә лә уңайлы. Был йәһәттән Стәрлетамаҡ Ишембай, Күгәрсен, Ейәнсура райондары өсөн уңайлы.

Академияның тотороҡло матди базаһы булыуы яҡшы күренеш. Факультеттарҙа эш яҡшы ойошторолған. Әммә мин үҙебеҙҙең башҡорт филологияһы факультеты тураһында айырым әйтеп үтергә теләйем. Беҙ элек иҫке корпуста уҡыныҡ. Ул корпус бөгөн бик матур, төҙөк хәлдә. Элек техник саралар бөтөнләй булмаған шарттарҙа уҡырға тура килгәс, хәҙер заманса технология талаптарына тап килгән, яңыса ойошторолған кластарҙа белем биреү мөмкинлектәрен күреү күңелгә йыуаныс. Тулыһынса компьютерҙар, мультимедия ҡоролмалары менән йыһазландырылған кабинетыбыҙҙа студенттарҙың интернет технологияларын бушлай ҡуллана алыуы мөһим. Ятаҡта ла белем алыу өсөн шарттар тыу-

*Беҙ уҡыған саҡта студенттар үҙаллыраҡ ине. Ата-әсәйҙәр ҡайҙа, ниндәй шарттарҙа, нисек уҡығаныбыҙҙы ла белмәй ине. Аҡсаны ла тота белдек, 40 һум стипендия барыһына ла етә ине. Хатта өйгә күстәнәс ебәрергә лә аҡса ҡала ине. Уҡыуға етди ҡараныҡ. Уҡыуҙан тыш төрлө сараларҙа ла ҙур теләк менән ҡатнаштыҡ. Йәй төҙөлөш отрядтарында аҡса эшләп, ҡышҡылыҡҡа кейем алырға мөмкинселек тә була торғайны. Бөгөнгө студенттар ата-әсәһенә ныҡ бәйле. Ата-әсәһе ҡалаға килеп, уларҙы ятаҡҡа урынлаштыра, контролдә тота. Сөнки хәҙерге студенттарҙың психологияһы бөтөнләй икенсе. Улар балалыҡтан сығып бөтмәгән һымаҡ. Әлбиттә, бөтә студенттар ҙа улай түгел, әммә күпселек тап шулай.*

*✓ Әгәр ҙә уҡытыусының эш хаҡы берәй 20 мең тирәһе булып, яҡшы ғына йорто булһа, улар, әлбиттә, ҡайтып эшләргә риза булыр ине. Хатта шатланып уҡытырҙар ине.*

# Үрләргә кәрәк,
## тигеҙ урында...

ҙырылған. Беҙҙең академия ректорҙың йүнсел булыуы арҡаһында сәскә ата, тип әйтергә кәрәк. Етәксебеҙҙән уңдыҡ.

**▸ Һеҙҙең фекерҙе үҫтереп, Өфө менән Стәрлетамаҡты сағыштырыуға тағы бер ҡараш өҫтәргә була. Географик яҡтан ҡарағанда, баш ҡала тау башында ултыра. Уны яулар өсөн тауға үрмәләргә кәрәк. Ә Стәрлетамаҡ далала ултырғанлыҡтан, уға килеп ингәнеңде һиҙмәй ҙә ҡалаһың. Ә хәҙер тарихи яҡтан ҡарайыҡ. Башҡорт ихтилалдарынан һуң Өфө тирәһендәге башҡорт ауылдары ҡаланан ситкә күсерелә. Башҡорттарға Өфөгә инеү тыйылған саҡтар ҙа була. Башҡорт кешеһенең Өфөнө килеп "яулауын" ошо күренешкә лә бәйләп аңлатырға булалыр. Һуғыштан һуңғы йылдарҙа башҡорттарға Стәрлетамаҡ ҡалаһына килеп төйәкләнеү, Өфө менән сағыштырғанда, күпкә еңелерәк булған. Иртәрәк килгәнгә күрә, нигеҙҙәрҙең нигеҙен тәшкил итеүсе милли техник интеллигенция ла бында нығынып, ҡала сәнәғәтенә нигеҙ һалышҡан. Шулай булғас, башҡорттарға был ҡалаға инеү юлдары ла иркенерәк булған, тип әйтергә була. Шуның өсөн дә, бәлки, үткән быуаттың 80-се йылдарына тиклем Стәрлетамаҡ милли интеллигенцияның үҙәге булғандыр. Быны күптәр таный. Хатта Рәми ағайҙың "Эсең бошһа, һыпырт Стәрлегә..." тигән шиғыр юлдары ла бар. Ғөмүмән, ошолай сағыштырғанда Өфө ниндәйҙер бейеклек һымаҡ ҡабул ителә. 90-сы йылдарҙағы үҙгәрештәр башланғас, Өфө ысын мәғәнәһендә үҙәккә әйләнде. Шулай ҙа, уға тиклем - Стәрле үҙәк булды һәм педагогия академияһының үҙенсәлеге шуға бәйләлер.**

**З. СӘЛИХОВА:** Был фекер менән килешәм. Мәктәпте бөтөү менән минең алда "Ҡайҙа уҡырға барырға?" тигән һорау булманы. "Мотлаҡ Стәрлегә!" ине яуап. Тарихи яҡтан да, географик яҡтан да күңелгә яҡын ер - Стәрлетамаҡ. Күрәһең, Өфө ул саҡта беҙҙең өсөн ябыҡ булғандыр.

**▸ Ә бына һеҙгә, Зөлфиә Әбделхәй ҡыҙы, технология һәм эшҡыуарлыҡ факультетында эшләүегеҙгә бәйлән, шундайыраҡ һорау биргем килә: һеҙҙең йүнәлеш яңы, кәрәкле йүнәлеш булып тора һәм һеҙҙең факультет алған йүнәлештә милләтебеҙҙең киләсәге нисек сағыла?**

**З. ЙӘҒӘФӘРОВА:** Һорауығыҙ бик урынлы, рәхмәт. Ысынлап та, 30-сы йылдарға тиклем мал үрсетеп, тырышып донъя көткән башҡорт байҙары бихисап булған. Малмөлкәттәрен тартып алыу башланғас, улар бар байлығын дәүләткә тапшырған. Күбеһенең байлығын тартып алып, үҙҙәрен Себергә оҙатҡандар. Бөгөн донъя кирегә әйләнде. Бәләкәй, урта эшҡыуарлыҡ төшөнсәләре барлыҡҡа килде. Әҙер рецепт юҡ, шулай ҙа ошо осорҙа беҙҙең халыҡҡа эшҡыуарлыҡ та ят булырға тейеш түгелдер. Иң беренсе сиратта кеше эш менән шөғөлләнергә тейеш. Кешенең ҡулында эше булһа, ул ғаиләһен ҡараһа, эшенән ҡәнәғәтлек тапһа, шул ваҡытта нимәлер килеп сығыуы мөмкин.

Ауылдар хәленә килгәндә, бөгөн сүп-сар баҫҡан яландар тулып ята. Элек һәр ауылда бер-ике ферма бар ине. Хәҙер ауылдар бөлгөнлөккә төшөп бара. Ауылда, асылда, пенсионерҙар, уҡытыусылар һәм ике-өс фермер ғына йәшәй. Әммә бер-ике кеше менән генә әллә ҡайҙа китеп булмай. Эшҡыуарлыҡҡа күмәкләп килергә кәрәк. Беҙҙең факультетта буласаҡ эшҡыуарҙар тәрбиәләү эше үҙенең һөҙөмтәһен күрһәтер, тип өмөт итәм. Күптән түгел ҡортсолоҡ буйынса белгестәр әҙерләй башланыҡ. Махсус курс астыҡ. Был һөнәрҙе үҙләштереү өсөн бал ҡортоноң үҙе һымаҡ егәрле булырға кәрәк.

**▸ Үҙегеҙҙең студенттарға, уларҙың тормошо нисек формалашыуына ҡарап, ниндәйҙер өмөтлө прогноздар әйтә алаһығыҙмы? Һеҙҙә уҡыған башҡорт йәштәренең артабанғы тормошо нисек дауам итә?**

**З. ЙӘҒӘФӘРОВА:** Дөрөҫөн әйткәндә, беҙ уларҙы биш йыл буйына ҡалалағы рәхәт тормошҡа өйрәтәбеҙ ҙә, улар ауылға ҡайтмай ҙа ҡуя. Өйләнәләр, фатир арендалайҙар, йә булмаһа, ятаҡтарҙа йәшәйҙәр. Ир-ат милицияға барып морон төртә. Шулай итеп, ир-егеттәр үҙҙәренең дипломы буйынса эшләй алмай. Ә ауылға ҡайтҡандары матур итеп уҡытыусы булып эшләй. Кешегә нимә кәрәк? Йорт, эш кәрәк. Ауылға ҡайтып, өй төҙөп, эшләп, матур итеп донъя көтөүселәребеҙ бар. Шул уҡ ваҡытта, ҡалала тороп ҡалып, этләнеп йөрөгәндәре лә байтаҡ. Ҡайһы берәүҙәр ҡалала ла үҙенең урынын таба ул. Алған белемдәре үҙенекен итә.

**▸ Әлеге ваҡытта бик күп педагог дипломлы йәштәр ҡалалар буйлап эш эҙләй. Асылда ҡыҙҙар шулай йөрөй. "Ниндәй генә эш булһа ла булһын, тик мәктәпкә бармайым", тигән фекерҙә улар. Ҙур урындарҙа ултырған абзыйҙар бер туктауһыҙ уларға эш эҙләп шылтырата. Ғөмүмән, уҡытыусы артыҡ кешегә әйләнә бара. Быға нисек ҡарайһығыҙ?**

**З. СӘЛИХОВА:** Был, ысынлап та, хәҙерге ваҡытта ҙур проблема. Сәбәптәре төрлө-төрлө. Беренсенән, Зөлфиә Әбделхәй ҡыҙы әйткәнсә, йәштәр биш йыл буйы ҡала тормошона эҫенеп өлгөрә. Ғөмүмән, ҡалала уңайлыҡтар бик күп. Бер яҡтан ҡараһаң, был ыңғай күренеш. Кеше һәр ваҡыт уңайлылыҡҡа ынтыла. Беҙҙең тәбиғәтебеҙ шулай.



Йәш белгестәрҙең ауылға ҡайтып, уҡытыусы булып эшләмәүенең икенсе сәбәбе финанс менән бәйле. Ҡайтып эшләрҙәр ҙә ине - эш хаҡы аҙ. Эш башлаған уҡытыусы 5-7 мең генә аҡса ала. Уларға кейенергә лә кәрәк. Егет кеше икән - фатир кәрәк. Ауылда фатир табыуы ҙур проблема тыуҙыра. Мәктәп өйөнә генә һылтанырға булыр ине лә, ундағы шарттар тураһында барыбыҙ ҙа беләбеҙ . Әлбиттә, йәштәрҙең ундай шарттарға барғылары килмәй. Бөгөн автомобиль алыу теләге - нормаль күренеш. Ә мәктәптә уҡытыусы булып эшләгән йәш кеше уны нисә йылдан һуң ғына ала ала? Әгәр ҙә уҡытыусының эш хаҡы берәй 20 мең тирәһе булып, яҡшы ғына йорто булһа, улар, әлбиттә, ҡайтып эшләргә риза булыр ине. Хатта шатланып уҡытырҙар ине.

**▸ "Уҡытыусы белем бирергә тейешме, әллә тәрбиәләргәме?" тигән һорауға шулай яуап бирергә мөмкин булыр ине: әгәр ҙә уҡытыусы балаға дөрөҫ тәрбиә бирһә, уҡыусы белем алыуҙың кәрәклеген үҙе лә тояса. Белемгә нигеҙ тәрбиәлә һалына. Вадим Сафин: "Юғары уҡыу йортонда белемде бирмәйҙәр - ә алалар", - тип әйтә торғайны...**

**З. СӘЛИХОВА:** Тәрбиә биләүҙән башлана. Бала мәктәпкә барғас, һуң була. Уҡытыусы ғына нимә тәрбиәләһен инде? Бала төшкә тиклем мәктәптә була ла, аҙаҡ бит ул өйөнә ҡайта. Ата-әсә аҡса табырға тырышып йөрөй, ә бала өйҙә яңғыҙы моңая.

**З. ЙӘҒӘФӘРОВА:** Баланы һикегә буй ятҡан сағында түгел, ә арҡыры ятҡан сағында тәрбиәләргә кәрәк. Баланың теле асылып, атлай, һөйләшә башлағас тәрбиәләй башлармын тип көтөп йөрөһәң, йәғни һике буйына ята башлауын көтһән, иң ҡиммәтле ваҡытты үткәреп тә ебәрәһең.

*Беҙҙең халыҡты эшҡыуарлыҡҡа күпләп йәлеп итергә кәрәк. Ошоно аңлатыу маҡсатында үҙ эшен асҡан элекке студенттарыбыҙ менән осрашыуҙар үткәрәбеҙ. Ауылдан килгән студенттарға: "Һеҙҙең технология һәм эшҡыуарлыҡ буйынса белгес булыуығыҙҙы раҫлаусы документығыҙ буласаҡ. Шуға күрә үҙегеҙҙең эшегеҙҙе асып ебәрә алаһығыҙ, мәктәптә уҡытыусы урыны булмаһа ла, һеҙҙең киләсәгегеҙ бар", - тип аңлатырға тырышабыҙ. Технология үҫеше интеллект үҫешен тотҡарлаһа ла, һәр бер нәмәнең ыңғай яғы ла була. Мәҫәлән, мин ҡайһы саҡта студенттарымдан мәғлүмәт технологияларына өйрәнәм. Улар яныма килә лә: "Апай, бына бер уңайлы программа сыҡҡан", - тип, мине таныштыра һалалар.*

**▸ Беҙ күп кенә кәрәк булмаған белгестәр әҙерләйбеҙ. Ғөмүмән, һеҙ юғары белем биреү системаһына нисек ҡарайһығыҙ? Әйтәйек, Берҙәм дәүләт имтиханына ҡарашығыҙ нисек? Һеҙҙә үҙегеҙ теләгән формала юғары уҡыу йорто төҙөү мөмкинлеге бирелһә, һеҙ уны нисегерәк итеп ҡорор инегеҙ?**

**З. ЙӘҒӘФӘРОВА:** Совет мәғариф системаһы бөтә донъя буйынса иң алдынғыһы һаналған. Бөгөн ике кимәлдәге белем биреүҙән - бакалавр һәм магистратура системаларының нимәгә килтеререн аныҡ ҡына әйтеп тә булмай. Берҙәм дәүләт имтиханы буйынса шул тенденция күҙәтелә: хәҙер ул һынауҙарға әҙерләнеү процесы, белем биреүҙән бигерәк, уҡыусыларҙы яҡшы һөҙөмтәләргә һөйрәкләп килтереү һымаҡ күренә. Юғары уҡыу йортона документтарҙы тапшырыусының сынбарлыҡтағы белемен билдәләүе ауыр. Вузға ниндәй абитуриенттар кәрәк - шуларҙы һайлап алыу инициативаһын тартып алыу, русса әйткәндә, беҙгә юғары уҡыу йортона студенттар ҡабул иткән саҡта "ҡапсыҡ эсендәге бесәй" менән эш итеүҙе хәтерләтә.

Уҡытыусыларҙың эш хаҡын арттырырға кәрәк, әлбиттә. Кешене иң тәүҙә икмәк йөрөтә. Һәр кемдең ғаиләһе бар. Шуға эш хаҡы мәсьәләһе һәр кемгә ҡағыла. Әгәр ҙә юғары уҡыу йортон үҙемсә ҡороу форсаты бирелһә, иң беренсе аҙымым - уҡытыусыларҙың эш хаҡын арттырыу булыр ине.

**З. СӘЛИХОВА:** Уҡытыусыларҙың эш хаҡы завод эшселәренең эш хаҡы менән бер иш булырға тейеш, тип һәр ваҡыт әйтәләр. Мин дә уҡытыусының социаль шарттарын яҡшыртыу яҡлы. Берҙәм дәүләт имтихандарына килгәндә, теүәл фәндәрҙән ул типтағы имтихандар, бәлки, кәрәктер ҙә. Ә гуманитар фәндәргә ул бик тура килеп бөтмәй. Мәҫәлән, мин рус әҙәбиәте буйынса Берҙәм дәүләт имтихандарында ҡулланылған тестарға ҡаршы. Әҙәбиәтте белгән кеше ижади фекерләй. Шуға күрә тест сиктәре генә әҙәбиәт буйынса имтихандар өсөн бик тар.

**З. ЙӘҒӘФӘРОВА:** Беҙ - үткән быуат, йәштәр - XXI быуат кешеләре. Ни генә әйтмәйек, йәштәр барыбер үҙенсә эшләй. Беҙҙең әйтеүебеҙ менән генә йәштәр үҙгәрмәй. "Мин шулай уйлайым, һин дә шулай уйларға тейешһең" тип әйтеп, беҙ йәштәрҙе тәрбиәләй алмайбыҙ. Һәр кеше үҙе ниндәйҙер һығымтаға килергә тейештер. Беҙ тәрбиәнең һөлдәһен генә бирһәк, ҡалғаны иһә, йәштәрҙең үҙҙәренең ҡулында. Кеше өсөн икенсе кеше йәшәй алмай. Һәр кем үҙенең хаталарында үҙе өйрәнергә тейеш. Аллаһы Тәғәлә йән биргәнгә йүн бирә, тип дөрөҫ әйткәндәр.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Күреүегеҙсә, халыҡ яҙыусыһының исемен йөрөткән был уҡыу йортонда Зәйнәб Биишеваның үҙе кеүек фиҙаҡәр, сәмсел һәм тырыш, алдынғы ҡарашлы уҡытыусылар эшләй. Әлбиттә, былар Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия академияһының 70 йыллыҡ эш тәжрибәһе, милли традициялар күсәгилешлеге һөҙөмтәһе лә. Традиция йәшәгән ерҙә милләт тә йәшәй.**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ** әңгәмә ҡорҙо.

**Илгиз ИШБУЛАТОВ** яҙып алды.

**✓ "Бүребай. Бүре күҙле малай ҡайҙа?" Хәнйәр алышында йөрөй икән. Был хәтәр ярышта ҡатнашыуынан бигерәк, хәнйәрҙе иҫ киткес оҫта уйнатыуы шаҡ ҡатырҙы Хөсәйенде. Эйе, бының өйрәтеүсеһе шәп. Кем икән ул?**



Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА

# ТЫУМАҒАН УЛЫМ

## Повесть

(Гәзит варианты)

Ауҙан ҡайтҡан иптәштәренә лә күргән-кисергәндәрен һөйләмәне. Киреһенсә, дөрләтеп, ашыҡтырып, ары алып китте. Кейекбирҙе йырау менән атаһы иҫке дуҫтар. Йыл һайын ҡунаҡҡа саҡырышалар, аҙналар буйы бер-береһендә һыйланышып яталар, оҫталарын, көрәшселәрен саҡырып, оло йыйын ойошторалар. Был юлы Ишҡар бейҙеке сирут. Саҡырыусы итеп улын ебәргәнен күргәс, йырауҙың ғәжәпләнеүенең сиге булманы. Тимәк, атаһының бурыстарын атҡара башлаған, яуаплылыҡ әкренләп улының иңенә һалына, тип уйланы Кейекбирҙе. Бүләктәр, аулаған йәнлектәрҙе алдына килтереп һалғастары, бөтөнләй телдән ҡалды. Ҡаршыһында ысын ир-егеттәр, ырыуҙың ышаныслы таяныс-терәктәре тора ине. Айырым тирмәләр ҡороп, ҡаҙан аҫтырып, егеттәрҙе оло ҡунаҡ итеп, бер нисә көн ҡайтармай һыйланы. Хөсәйен данлы йырауҙан яңы йырҙар отто, ҡобайырҙар, әллә күпме тәүарих тыңланы. Балуандар тураһында тыңлағанда бөркөттәй ҡанатланды, үҙен шул айбарлы замандарҙа йәшәгәндәй тойҙо.

Байрам кәйефен көтөлмәгән бер осрашыу саҡ боҙманы. Хөсәйен егеттәре менән һунарҙан ҡайтып ингәндә Кейекбирҙе бай тирмәһенән алыҫ түгел бер нисә ат бәйле тора ине. Ситтәрәк һалдаттар урынлашҡан. Хөсәйен һағайҙы. Ул арала булмай, кемделер эйәртеп, Кейекбирҙе бай тирмәһенән сыҡты. Хужаның артында Әләксәйҙе күргәс, егет шып ҡына туҡтаны. Хилаф эшен асыҡлағандар ҙа эҙәрлекләп артынан килеп еткәндәр һымаҡ тойолдо уға. Был мәлдә яралы һалдат тураһында һораша ҡалһалар, бер нәмә тип тана ла алмаҫ ине... Ләкин Әләксәй Хөсәйенде күреү менән йылмайып ебәрҙе.

- Ишҡар бейҙең улы бында икәнен ишеттем! Кейекбирҙе оҫта үҙендә ҡунаҡтар барлығын әйтте.

Ҡул бирешеп күрештеләр. Әләксәй кешеләре оҙаҡ торманы, ҡайҙалыр ашыға ине улар.

- Атайыңа сәләм әйт! - тине ул хушлашҡанда.

Хөсәйен ипләп кенә хужанан уларҙың нимә өсөн бында килгәнен белеште. Кейекбирҙе ҡул ғына һелтәне.

- Темеҫкенеп йөрөй шунда. Әллә ниндәй байлыҡ эҙләйҙәрҙер. Ер-һыу атамаларын һораша. Ҡоросмо, тимерме кәрәк уларға... Үҙҙәре тәғәйен генә әйтмәйҙәр.

Ҡайтыу яғына ыңғайларға! Хөсәйен "эҙләнеүселәр" артынан тиерлек үк ҡуҙғалды. Ҡыҙыуыраҡ тоттолар шикелле, тегеләрҙе ҡыуып еттеләр. Быға әллә ни ҡыуанманы Хөсәйен. Икегә бүленгәндәр, ахрыһы, Әләксәй төркөмөндә кеше әҙерәк ине. Ирәбе йылмайған тылмасҡа теләктәшлек белдермәй сараһы ҡалманы, хатта аулаған ҡош-ҡортто уға бүләк итте. Үҙҙәре менән ашарға саҡырһалар ҙа, барманы. Егеттәре менән ситтәрәк урынлашты. Көн кискә һарҡҡайны. Ашығырға кәрәк, ләкин ҡуҙғалырға өлгөрмәнеләр, ҡапыл тауыш ҡупты. Хөсәйен дә, егеттәре лә йәһәт кенә уҡ-яндарына йәбеште. Бына бер нисә һалдат күренде. Улар кемделер өҫтөрәп килтерҙеләр. Хөсәйендең тамағына төйөр тығылды - был кеше Ҡараслан яғында йылға буйында мышы аулаусыларҙың береһе ине. Таҡыр баш, ҡалын ҡара мыйыҡ.

- Танышың түгелдер бит? - тип һынамсыл ҡарап ҡуйҙы Әләксәй.

Хөсәйен "эйе" тигәнде аңғартып баш ҡаҡты. Әләксәйҙең ҡыҙыҡһыныуы көсәйҙе генә.

- Танышың булғас, нишләп улай яман ҡарайһың?

Егет уны ишетмәгәндәй һораны.

- Ул әле нимә эшләгән?

- Инде нисә көн беҙҙең арттан күҙәтә. Әләктерер өсөн бәләкәс кенә хәйлә ҡорорға тура килде.

- Ул үҙе анра кеше ине. Атайымдың ялҡау ғына бер көтөүсеһе ул. Йылҡыларын урлап, ҡаҙаҡтарға ҡыуып алып китте. Шунан бирле ҡасып йөрөй. Беҙ ҙә бит уны эҙләп шул тиклем ара үттек. Уға атайым үсле. Тотһа, яҙаһын бирер ине.

- Һүҙ юҡ, Ишҡар бейҙең ярҙамы күп тейҙе. - Талмас мыйығын оҙаҡ ҡына борғослап ултырҙы. - Пушкарев уны бик хөрмәт итә.

- Атайым да уны хөрмәт итә.

- Оҙаҡламай тағы ла янына барырға йыйынабыҙ. Атайыңа сәләм еткерә тор. Ярар, ал был ҡасаҡты. Бейгә минән бүләк. Тик ҡара уны!..

Тотҡондо Хөсәйендең ни өсөн үҙҙәре менән алғанын аңламаһалар ҙа, егеттәре һорау биреп булышманы. Байтаҡ ара һүҙһеҙ барҙылар. Хәүефле урындан алыҫлашҡан һымаҡ булғас, Хөсәйен атының ауыҙлығын шаҡарҙы.

- Егеттәр, һеҙ юлығыҙҙа булығыҙ, мин... ҡыуып етермен. Оҙаҡ түгел. Тик туҡталмағыҙ.

Дуҫтары күҙҙән юғалғас, таҡыр башлы әҙәмде ҡаты итеп этеп ебәрҙе, теге һөрлөгөп барып төштө.

- Кем һин, шаҡшы әҙәм? Ниңә ҡан көһәп йөрөйһөң? Нимә етмәй һиңә?

Тотҡон бер нәмә лә өндәшмәне.

- Мин һинән ярҙам һораманым.

Был һүҙҙе көтмәгән Хөсәйен башта аптырап китте, унан инде йән асыуы менән берҙе тондорҙо. Шул саҡ эргәһендәге ҡайынға нимәлер туп итеп килеп бәрелде. Егет ситкә һикерҙе, ялп итеп артына боролдо. Ҡайын олонында хәнйәр бәүелә ине. Ҡулы бәйле ир кейектәй ситкә тәгәрәне, тап шул яҡтан ҡара түбәтәйле малай пәйҙә булды. Хөсәйен шул саҡ ҡулындағы ҡамсыһы менән малайға берҙе тамыҙҙы. Бала "ыһ" та итмәне, йыртҡыс кейектәй утлы ҡарашын төбәгән килеш тора бирҙе.

- Кем ул һеҙ?

Хөсәйен йәнә һелтәне, ләкин ни өсөндөр һуғырға ҡулы барманы.

- Ошо әҙәм аҡтығын ҡотҡарам тип, үҙем ут эсенә инә яҙҙым. - Хөсәйен ирҙең бәйен систе. - Етмәһә, миңә хәнйәр быраҡтыралар!

- Ҡотҡарырға маташыуыңа рәхмәт, ҡустым. Бүребай һине иҫкәртте генә. Ул яҙа атмай хәнйәрен, белеп ҡуй, - тине мыйыҡлы әҙәм.

- Нимә көнәйһегеҙ һуң һеҙ?

- Баҫҡынсыларға үлем!

- Тотасаҡтар бит улар һеҙҙе. Нишләп уларҙағы көстө самаламайһығыҙ?

- Һин был тирәнеке түгел. Кем затынан булаһың? - тине ир.

Хөсәйен иренен тешләне. Уға кем икәнен әйтергә ярамай.

- Мин һеҙҙе күрмәнем, ә һеҙ - мине. Юлдар ошонда айырыла.

Бер аҙҙан Хөсәйен иптәштәрен ҡыуып етте. Хөсәйен ҡайтҡас, тотҡон тураһында һөйләнеп йөрөмәҫкә ҡушты.

Ҡайтҡас, атаһына Әләксәй менән осрашыуҙарын һөйләмәйенсә булдыра алманы. Ишҡар бей һаҡалын һыпырып оҙаҡ ултырҙы.

- Был ғиллә Моратшалар яғынан килмәйме икән? Моратшаның ҡустыһы Янғол күптән юҡҡа сыҡты. Үлтереп киттеләр шикелле үҙен. Һин ярҙам итешкән әҙәмдең ҡиәфәте уныҡына тура килмәй. Янғол оҙонса битле, шырт сәсле ине. Ишет, улым, бынан ары үҙең белмәгән бер кешегә лә ярҙам итмә! Бәләһенән баш аяҡ. Ышаныс юҡ әҙәмдәргә хәҙер. Хатта ғына йомшаҡһың шул, улым... Ағайҙарың улай түгел ине. Ғүмерҙәре генә ҡыҫҡа булды. Инде ул яҡтарға юлың төшмәҫ. Бөттө сәфәрең! Байрам теләһә, Кейекбирҙе үҙе килер, үҙе ҡайтыр. Миңә хәҙер Әләксәйҙе йыуаһы бар... Һиңә анһат ҡына тоттороп ебәргән, ти. Беләм мин ул этте...

Ишҡар бей иң матур йәйләүендә, иң матур урында уҙғарҙы ул йыйынды. Хатта белеше Пушкаревты үҙе барып саҡырып ҡайтты. Күрһен киң күңелле йомарт башҡорт түрәһен. Берәй файҙаһы теймәй ҡалмаҫ, тормош бит тиҙ үҙгәреүсән. Пушкаревтың хатта ки ҡатыны менән килеп төшөүе уғата шатлыҡ өҫтәне.

Хөсәйендең иң яратҡаны ат бәйгеһе була торғайны, ләкин кәүҙә ауырайғас, сәмле ярышты ҡалдырырға тура килде. Уның ҡарауы, һыбай сабып барышлай уҡтан сәпкә тейҙереүҙә уға еткән егет юҡ. Хөсәйен, ғәҙәтенсә, иң башта ат сабыштырғанды ҡарарға булды. Ат ярышы бөтөн халыҡты үҙенә йыйя. Бер мәл ҡара түбәтәйле малайҙы күреп баҫҡан урынында ҡатып ҡалмаһынмы! Хәҙер инде Ишҡар бейҙең йәйләүенә лә килеп еткәнме ни Бүребай атлы шөкәтһеҙ шайтан таяғы! Ҡайһы ауылдан, кем балаһы һуң был кәперәйгән? Бер үҙе генә килмәгәндер бит? Ата-инәһе ситтән түгелдер, шәйт. Шуға ла Бүребайҙан күҙ яҙлыҡтырмаҫҡа ине. Егеттәренә һағаларға әйтеп ҡуйырғамы әллә? Йомағужа ҡай тирәлә йөрөй һуң? Хөсәйендең уйын бүлдереп, шау-шыу ҡупты. Кем алдан килә? Шул малай! Атына ятып алған да оса ғына! Беренсе булып килеп еткән Бүребайҙы уратып алдылар.

Пушкаревтың бисәһе нимәлер тип әйтте. Полковник баш ҡаҡты, шунан ҡулы менән ишаралап, еңеүсене үҙе янына саҡырҙы. Малай, аңламағандай, икенсе яҡҡа боролдо. Ишҡар бей йәһәтләп ике яранын ебәрҙе. Тегеләр малайҙы атынан тартып тигәндәй төшөрөп, хужалар яғына өҫтөрәне. Бей улы халыҡты йыра-йыра шул яҡҡа атланы. Пушкаревтың ҡатыны маҡтау һүҙҙәре теҙә-теҙә, үҙенең бүләген һуҙҙы, ләкин еңеүсе малай текә ҡараған килеш тора бирҙе. Хөсәйен үҙе лә һиҙмәҫтән, ҡамсыһын йәтешләп тотто. "Ал!" тине уҫал тауыш менән. Малай уға күҙ ҡырыйы менән генә ҡарап алды ла, бүләкте ҡымтып тотто. Пушкаревтың ҡатыны малайҙың биленә тағылған семәрле, алтын буталлы мөгөҙгә ҡулын һуҙып, нимәлер әйтте. Бүребайҙың күҙендә уҫал осҡон тоҡанды, мөгөҙҙө артҡараҡ шылдырып ҡуйҙы.

- Екатерина Федоровна Питерҙағы әхирәтенә лә иң елле мышының мөгөҙөн алып ҡайтырға вәғәҙә биргәйне. Әле күңеленә ятҡанын тап иткәне юҡ, - тине Пушкарев Ишҡар бей яғына боролоп.

- Был да ысын сәнғәт! - Екатерина Федоровнаның йөҙөндә һоҡланыу сағылды. - Тәбиғәт биҙәгенә кеше маһирлығы ҡушылған!

Малай ҡырт ҡына боролдо ла халыҡ араһына инеп тә сумды. Ҡулы ҡыҫып ҡына торған Бүребайҙың был тирәнән ситкәрәк олағыуы яҡшыраҡ, инде иркен тын алған Хөсәйен атаһы менән уның оло ҡунағына һаҡ ҡына ҡараш ташланы. Юҡ, ике кешенең әлеге эске алышын һиҙмәнеләр шикелле, бар донъяларын онотоп, үҙ-ара гәпләшәләр. Шулай ҙа ҡарт төлкө Пушкарев уның һынамсыл ҡарашын тойғандыр, бей улына боролоп, ҡәнәғәт йылмайып, баш ҡаҡты.

Сәпкә тейҙереү ярышы башланғас, Хөсәйен йәһәтләп шул яҡҡа атланы. Мәргәнлек уныҡы, был ярышта ул берәүгә лә ал бирергә тейеш түгел. Шулай булды ла инде. Ҡотлау-маҡтау, быларына күнеккән Хөсәйен әллә ни иғтибар бирмәне, һаман ҡарашы менән ят малайҙы эҙләне. "Бүребай. Бүре күҙле малай ҡайҙа?" Хәнйәр алышында йөрөй икән. Был хәтәр ярышта ҡатнашыуынан бигерәк, хәнйәрҙе иҫ киткес оҫта уйнатыуы шаҡ ҡатырҙы Хөсәйенде. Эйе, бының өйрәтеүсеһе шәп. Кем икән ул? Нишләп һаман бер үҙе, ҡайҙа яҡындары? Бына уларҙың ҡарашы осрашты. Малай күҙ ҡырыйы менән сәнсерҙәй итеп ҡарап алды ла ситкә боролдо.

"Тағын юҡҡа сығасаҡ..." Хөсәйен атына атланды ла артынан ҡыуа төштө. Ара яҡынлашты. Шул саҡ Бүребай ялп итеп артына боролдо, хәҙер урман эсенә инеп сумасаҡ. Хөсәйен үҙе лә һиҙмәй ҡысҡырып ебәрҙе.

- Туҡтап тор!

Туҡтау урынына малай әсе итеп ҡысҡырып ебәрҙе лә, атының бөйөрөнә тибеп, ары сабып китте. Был бөрсә, ысынлап та, зыйтҡа ныҡ тейҙе. Сәмләнгән Хөсәйен нисек тә унан ҡалмаҫҡа тырышты. Малай ҡапыл атының ауыҙлығын шаҡарҙы. Ат үрәпсеп, артҡы аяҡтарына баҫты.

- Әйт, һин кем?

- Бүребай. Беләһең бит..

- Юҡ, ҡайһы ырыуҙан тием? Ҡайһы ара, кем заты?

- Сәнжәр...

Малай урман эсенә инеп юҡ булды. Уны эҙәрлекләп, Хөсәйен ары үтте, бире үтте, тик бер ниндәй ҙә эҙгә төшә алманы. Ҡапыл өҫтән нимәлер гөрҫ итеп ҡалды, Хөсәйен уны-быны аңлағансы, ерҙә ята ине инде, күкрәгенә менеп ултырған малай үңәсенә хәнйәр терәне.

- Әйтмәнемме мин һиңә эйәрмә тип?

Бүребай һыҙғырып ебәреүгә ағастар араһынан аты елдереп килеп сыҡты. Малай уға һикереп менде лә ары сабып китте. Хөсәйен үсмер киткән яҡҡа ҡарап ултыра бирҙе лә, һыбайлы киткән яҡҡа тартылды. Бер аҙ бара биргәс, төргәк ятҡанын күреп ҡалды. Был бит бәйге еңеүсеһенә Пушкаревтың бисәһе биргән бүләк. Прәниктәр ергә һибелгән...

**(Дауамы бар).**

ҠУЛ БЕЛГӘН ШӨҒӨЛ

(Башы 1-се биттә).

**Дебет шәлдәребеҙ ҙә үҙенең йылылығы, семәрле биҙәктәре, сифаты менән борон-борондан дан тотҡан һәм бөгөнгә көндә лә ҡатын-ҡыҙҙар кейеменең айырылғыһыҙ бер өлөшө булып тора. Ошо көндәрҙә баш ҡалабыҙҙа булып үткән башҡорт шәленең республика фестивалендә ҡатнашыусы оҫталарҙың берҙәм фекере шундай: "Башҡорт шәлен беҙ хатта алтынға ла алмаштырмаҫ инек". Нисәмә йылдар ошо шөғөлдә лайыҡлы йәшәйеш сығанағын күргән оҫталарҙың былай тип әйтеүе бер ҙә юҡҡа түгел. Хәйер, үҙҙәрен тыңлайыҡ:**

# КҮҢЕЛЕБЕҘ БИҘӘКТӘРЕН...

## шәлгә төшөрәбеҙ, ти оҫталар

**Әсмә ЙӘНСУРИНА, Көйөргәҙе районы Яманғол ауылы:** Шәл - ул башҡорттоң иң ҙур ҡомартҡыһы. Үҙемдә белгәндә ойоҡ һүтә башлағайным, 2-се класҡа уҡырға барғанда епте сирата белә инем инде, ә 3-сө класта шәл бәй-ләй ҙә башланым. Ауылыбыҙҙа бөтә ҡатын-ҡыҙҙар ҙа ҡул эшенә әүәҫ, һәр береһе шәл бәйләй. Әгәр сит райондан төшкән килен шәл бәйләй белмәһә, бынау килен шәл дә бәйләй белмәй икән, тип аптырай торғайнылар. Һәм ул киленде бер йыл эсендә күмәкләп шәл бәйләргә өйрәтеп тә ҡуялар. Шәл бәйләү - әүәл-әүәлдән ауылыбыҙҙың иң килемле шөғөлө булып торҙо. Элек ауылда һарыҡ фермаһы ғына булды, унда ирететтәр генә эшләне. Ә ҡатын-ҡыҙҙар шәл бәйләү менән шөғөлләнде. Улар ноябрь, декабрь айҙарына урыҫ ауылдарынан килеүселәргә шәлдәрен әҙерләп тә ҡуйыр ине. СССР ваҡытында ла беҙ тик шәл менән генә көн күрҙек. Шәлде бирнәгә лә бирәләр, киленгә лә ябалар, ҡәйнәгә лә бүләк итәләр. Мин ҡыҙымды кейәүгә биргәндә шәл яптым, бәләкәй булһа ла, әле үк ейәнсәремә лә бирнәлек итеп әҙерләп ҡуйҙым. Төрләсә тиҙлектә бәйләйем, ҡайһы саҡ көйефем яҡшы булһа, бер айҙа икене лә бәйләп ҡуям.

**Нәйлә ИБРАҺИМОВА, Күгәрсен районы:** Беҙҙең район шәл бәйләү буйынса элек-электән дан тотҡан. Был беҙҙең ҡанға һеңгән шөғөл. Иҫ белгәндән алып әсәйемдең дә, өләсәйемдең дә ҡулында шәл бәйләме булыр ине. Мин әсәйемдең янына ултырып, уның күҙҙәрҙе нисек алғанын, нисек салғанын ҡарап ултыра торғайным, 2-се класта уҡыған сағымда үҙем дә бәйләргә өйрәндем. Элек аялап бәйләй торғайнылар, беҙ шул аяның ҡалған төпрәһен иләп өйрәндек. Тәүҙә бейәләй, ойоҡ бәйләнек, һуңынан шәлгә күстек. Беҙ үҫкән ваҡытта шәл беҙҙә кейендерҙе лә, ашатты ла. Мин Өфө ҡалаһында уҡыған сағымда күп итеп дебет алып килә торғайным, уны ял көндәре иләп ҡуям да, буш ваҡытымда шәл бәйләй торғайным. Элек дебет косынкалар 40 һум торҙо. Был ул ваҡытта ҙур аҡса ине. Шәлдәремде һатып, үҙемә аҡса эшләп, башҡалар менән тиң уҡып бөттөм. Икенсенән, был шөғөл күңел талабы, тип әйтер инем. Мин шул тиклем бәйләргә яратам, был ваҡытта мин ял итәм, асыуланған саҡтарымда ҡулыма бәйләмемде алыу менән тынысланам. Элек бесәй табаны, кәкерсәк, шыршы, һалма кеүек бер үк биҙәктәр ине, хәҙер биҙәктәр төрләнәнде. Беҙ хәҙер күберәк селтәрҙән ҡарап бәйләйбеҙ. Селтәрҙәрҙә матур биҙәк күренһә, мин уны тиҙ генә шәл ситенә һалам. Сигеү сигергә лә яратам. Унда ла биҙәктәрҙе селтәрҙәрҙән алам. Ҡунаҡҡа барғанда биҙәкле селтәр күрһәм, тиҙ генә төшөрөп алам. Рәссамдар күңел биҙәктәрен ҡағыҙға төшөрә, ә беҙ шәлгә һалабыҙ инде.

**Асия ӘБСӘЛӘМОВА, Йылайыр районы:** Шәл бәйләү минең йәшәйешемдең бер өлөшө, тип әйтһәм дә яңылышмам, моғайын. Был шөғөл беҙҙең ҡаныбыҙға һеңеп ҡалған. Шәл бәйләмәһәм, көнөм үтмәй, уның менән тормошома еңеллек алам. Бәйләгән шәлдәремде яҡындарыма бүләк итәм, балаларыма бирәм. Ун йәштәр самаһында бәйләргә мине еңгәйем өйрәткәйне. Иләнгән йөндән башҡорттоң киң таралған, ләкин иң ауыр һалма биҙәген өйрәтте. Йөн менән башлағайным, онотканмын да ҡуйғанмын. Һуңынан, өйрәтегеҙ, тип, апайыма ла, әсәйемә лә барып ҡарайым, ваҡыт юҡлығына һылтанып, тәки минең менән ултыра алманылар. Сейәрләнеп өйрәндем барыбер. Ситен бәйләй башлағайным, әсәйем ҡыуана-ҡыуана уртаһын бәйләргә тотондо. Шулай өйрәнеп киттем. Шәлдәр бәйләйбеҙ ҙә, әсәйем менән Ырымбур районы Ҡыуандыҡ ауылына алып барып һатабыҙ. Бәйләгән шәлдәребеҙҙе һатҡан аҡсаға китап ала торғайныҡ. Башҡорттоң был шөғөлө юғалып ҡалырға тейеш түгел, йәштәр ҙә өйрәнһен, егерле булһын. Элек өмәләр уҙғарып, аулаҡҡа йыйылышып, бер-беребеҙгә ситтәр бәйләшә, иләшә торғайныҡ. Хәҙер шәл бәйләү машиналары булғанға күрә өмәләр онотолдо. Элек кешеләр киндер һуҡҡан, уны эшкәрткән, ыштанын да, күлдәген дә үҙе теккән, шәл һуҡҡан, йәғни бөтә кейемдәрҙе лә үҙе етештергән. Шәл бәйләү шөғөлө быуындан-быуынға күсә килә, тип әйтер инем: үҙемдең ҡыҙым да, килендәрем дә шәл бәйләй.

**Миңзифа ИШЕМҒОЛОВА, Хәйбулла районы мәҙәниәт йортоноң халыҡ ижады буйынса методисы:** Беҙ был бәйгелә өсөнсө тапҡыр ҡатнашабыҙ. Үҙебеҙ менән күргәҙмәгә Билалова Шәрифә апайҙың өләсәһенән ҡалған йөҙ йыллыҡ һуғылған шәлен алып килдек. Был ҡәҙерле ҡомартҡы беҙҙең тыуған яҡты өйрәнеү музейында һаҡлана. Бындай һуҡҡан шәлдәрҙе ауылдарҙа бөтәһе лә эшләй алмаған, дөрөҫөн әйткәндә, егәрләләр генә булдыра алған был эште. Шәлдең ике яғы ла дебет булған, уға бер ниндәй ҙә ептәр ҡушылмаған, шуға күрә был шәлде һуғыуға бер килонан ашыу дебет киткән. Шуға күрә улар сифаттарын оҙаҡ һаҡлаған, йылы булған. Сәсәктәренә килгәндә, бер тишектән улар бишәр сәсәк сығарылып эшләнгән. Ошо сәсәген эшләр өсөн генә лә ярты килограмм дебет киткән. Шәлдәрҙе һуҡҡандан һуң ошо осҡаның ҡулына, кәзәһенә, шәленә күҙ теймәһен өсөн мотлаҡ бетеү тағылған. Һуғылған шәл-дәр халыҡтың түшәге лә, ябынып ятыр юрғаны ла булған; алыҫ араларға сәфәр төшһә, кешеләр бер-береһенән ошо шәлдәрҙе алып тороп булған. Беҙҙең шәл оҫталары Әбеш, Ғәлиәхмәт, Вәзәм, Үрнәк ауылдарында йәшәй, аҡ, күк, ҡара кәзәләр үҫтереп, шуларҙың файҙаһын күреп көн күрә. Аҡъяр ялан ауылы булғанға күрә, эре мал аҫырау йылдан-йыл ауырлаша, шуға күрә халыҡ күпләп кәзә аҫырауға күсә башланы. Кәзәне дебете һәм һөтө өсөн аҫырайҙар. Уның һөтө бик файҙалы, күп төрлө сихәттәрҙән дауа, ҡуйы булғанға күрә, тиҙ генә ҡаймаҡ булып төшә. Кәзә һөтөн хәҙер инде һатыуға ла сығара башланылар. Оҫталарҙың эштәре киләсәктә лә камиллашһын, тигән теләктә ҡалабыҙ.

**Мәүлиҙә МӘҠСҮТОВА, Көйөргәҙе районы, Таймаҫ ауылы:** Мин үҙемдең ҡасан шәл бәйләй башлағанымды ла белмәйем, үҙемдә белгәндә инде ҡулыма шәл тотҡайным. Шуға күрә мин шәл ауырыуы менән ауырыйым, тип көлөп алам ҡайһы саҡта. Районыбыҙҙа бөтә ҡатын-ҡыҙҙар ҙа бәйләй: шуның менән эшләйбеҙ, шуның менән күңел йыуатабыҙ. Киләсәктә был шөғөлөбеҙ юғалып ҡалмаһын өсөн уның серҙәрен балаларыма, килендәремә өйрәтәм. Мәләүез районы баҙарына барып, иң матур кәзә дебеттәрен һайлап алабыҙ, күҙ нурҙарыбыҙҙы түгеп, йөрәк йылыбыҙҙы һалып эшләйбеҙ, эштәребеҙҙән кешеләр ҡәнәғәт булһын, тип тырышабыҙ. Бәйләгән шәлдәремдең күбеһе бүләккә китә. Бына яңыраҡ һылыуымдың 60 йәшенә шәл бәйләгәйнем, күргәҙмәгә генә тип алып килдем. "Һат та, һат, юғары хаҡ бирәбеҙ", - тип ныҡышып һорайҙар. Әле миңә 62 йәш. Күҙҙәрем күрһә, ҡулдарым тотһа, алдағы көндәрҙә лә бәйләрмен дә бәйләрмен, тип уйлайым. Хәҙер олоғайғас, үҙебеҙ ҙә шул мамыҡ шәлгә уранып, төрөнөп кенә йөрөйбөҙ бит инде.

**Фәнирә КИЛДЕБАЕВА, Мәләүез районы Аптырак ауылы:** Беҙҙең дебет шәлдәр эргә-тирәлә борон-борондан дан тотто, нәк беҙҙең шәлдәрҙе һатып алыр өсөн алыҫтарҙан да килеп етә торғайнылар. Йәш саҡта шәлдәрҙе күберәк бәйләй торғайныҡ, әлбиттә, хәҙер, ологайһаҡ та, был шөғөлөбөҙҙө ҡулдан төшөргән юҡ. Ғөмүмән, беҙ, Аптыраҡ ауылының инәйҙәре, бер ҙә тик тормайбыҙ, үҙебеҙ "Аҫылташ" тигән фольклор ансамбленә йөрөйбөҙ, кис ултырыуға йыйылып, шәлдәр бәйләйбеҙ. Борон өләсәйҙәр беҙ сырхап китһәк, дебет шәлгә урай ҙа һала торғайны. Бәхтиһәң, шәл мамығының составында ланолин тигән матдә бар икән. Ул төрлө яраларҙы уңалтыу сифатына эйә, һөйәк һынғанда, быуындар һыҙлағанда мамыҡ шәлде урап йөрөү файҙалы. Хәҙер йәштәр балалары саҡ ҡына һыуыҡ тейһә, төрлө дарыу ҡаптыра башлай. Ә бына дарыу урынына мамыҡ шәлгә урап һалыу күпкә файҙалыраҡ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Өс тиҫтәнән ашыу шәл оҫталары ҡатнашҡан конкурстың һөҙөмтәһе буйынса, "Халыҡ кәсептәрендә традицияларҙы һаҡлағаны өсөн" номинацияһында Әбйәлил районынан Рәсилә Вәлиева, "Дебет шәл" номинацияһында Ейәнсура районынан Зөлфиә Бикбулатова, "Селтәр шәл" номинацияһында Көйөргәҙе районынан Нурия Солтанова Гран-приға лайыҡ булды.**

**Гөлнәзирә АЙЫТБАЕВА**
**яҙып алды.**







Филүс ШАКИРОВ фотолары.

СӘЛӘМӘТ БУЛ!

# ҺАЛҠЫН ТЕЙГӘНДӘ...

## нимә файҙалы, нимә юҡ?

**Үҙ ғүмерендә һәр кем яҡынса 200 тапҡыр һалҡын тейҙереп ауырый икән. Ғилми яҙыусы Дженнифер Акерман һалҡын тейеп сирләү буйынса һуңғы йылдарҙа үткәрелгән ғилми тикшеренеүҙәрҙе йыйған һәм уларҙы Daily Mail баҫмаһында баҫтырған. Әлбиттә, уларҙың ҡайһы берҙәре менән килешмәҫкә лә мөмкин, шулай ҙа һалҡын тейеү менән бәйле был мәғлүмәттәргә ҡолаҡ һалыу ҡамасауламаҫ.**

### С витамины һалҡын тейеүҙән ҡотҡармай

Быға тиклем был витамин миҙгел инфекцияларынан һаҡлаусы сара тип иҫәпләнә ине. Әммә 10 мең кеше ҡатнашҡан 30 клиник тәжрибә күрһәтеүенсә, аскорбин кислотаһы һалҡын тейеүҙән ҡотҡара алмай. Әгәр ҙә һеҙ спорт менән шөғөлләнәһегеҙ икән, С витамины яҡшы дуҫ була ала: тәүлегенә 200 мг аскорбин кислотаһы ҡабул иткән саңғысылар һәм марафонсылар башҡа спортсыларға ҡарағанда түҙемлерәк булып сыҡҡан.

### Үбешеү тыйылмай

Был иң көтөлмәгән асыштарҙың береһелер, моғайын. Вирустарҙың күбеһе организмға ауыҙ аша эләкмәй. Был белгестәр шундай тәжрибә үткәреп раҫлаған: һалҡын тейҙереп ауырып йөрөүселәр минут ярым тирәһе һау кешеләр менән үбешкән. Һөҙөмтәләр шундай: әгәр ҙә янығыҙҙа сирле берәү сөскөрһә йәки йүткерһә - вирустар танау йәки күҙҙең лайлалы тиресәһе аша йоғоуы ихтимал, әммә үбешкән саҡта вирус йоҡтороу 8 мең тапҡырға әҙерәк. Етмәһә, фәнни яҡтан дәлилләнгән - үбешкән саҡта ҡанға окситоцин гормоны бүленеп сыға, ә ул нервылар һәм иммун системаһын нығыта.

### Тауыҡ һурпаһы яҡшы дауа

Беҙҙең өләсәйҙәребеҙ был турала бик яҡшы белгән. Доктор Стивен Реннард тауыҡ һурпаһын тикшереп ҡараған һәм уның нейтрофилдарҙың - инфекция һөҙөмтәһендә ялҡынһыныу барышын кәметеүсе күҙәнәктәрҙең хәрәкәтен кәметеүен раҫлаған.

### Кейем йыуғанда вирустар йыуылмай

Әгәр ҙә кейемде ҡул менән йыуаһығыҙ икән, вирустарҙан арына алмаясаҡһығыҙ. Ысынлап та, ванна һәм кер йыуыу бүлмәләре киҙеү таратыусы урын була ала. Ә бына кер йыуыу машинаһында юғары температурала 99 процент вирустар юҡҡа сыға.

### Антибактериаль һабын инфекцияны туҡтатмай

Ғалимдар әйтеүенсә, миҙгел инфекциялары бактериялар түгел, ә вирустар арҡаһында тарала. Шуға ла бактерияларға ҡаршы көрәшеүсе һабын бында һеҙҙең ярҙамсы була алмай. Ә спирт нигеҙендә яһалған саралар вирустың таралыуын туҡтата ала.

### Ауырыһаң, өйҙә ултыр

Вирус таратыусы сығанаҡтар исемлегенә телефон, өҫтәл, компьютер “сысҡаны” һәм бүлмәләге һауа инә. Шуға ла күп эш урындарында бар хеҙмәткәрҙәр ҙә сылбыр буйынса ауырып сыға.

Әйткәндәй, уҡытыусылар, бухгалтерҙар, журналистар, юристар, банкирҙар, радио дикторҙары һәм табиптар һалҡын тейҙереп йышыраҡ ауырый.

### Сирлегә спиртлы эсемлек ярамай

Ғалимдар дарыу сифатында бер ниндәй төрлө лә алкоголле эсемлек тәҡдим итмәй. Сөнки ул вегетатив нервылар системаһына һәм терморегуляцияға тәьҫир итә, ә улар ауырыған саҡта былай ҙа бар көсөнә эшләй алмай.

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Был тикшеренеүҙәр авторҙарының дәлилдәренә ышанырғамы, юҡмы - үҙегеҙҙең ҡарамаҡта. Шулай ҙа табиптар фекеренсә, һалҡын тейгән саҡта әҙерәк ятып дауаланыу фарыз. Әгәр ҙә тән температураһы 37,5 градустан түбән икән, 40 минут тирәһе урамда йөрөп инеү файҙалы, сөнки асыҡ һауала вирустар тупланыуы миллион тапҡырға кәмерәк. Әгәр ҙә температура юғары икән, өҙлөгөү булып бөйөрҙәргә һәм үпкәгә зарар килмәһен өсөн табипҡа мөрәжәғәт итергә кәрәк.**

ҮҘ ӨЙӨМ - ҮҘ КӨЙӨМ

**Халыҡ араһында киң таралған был әйтемгә ҡараһаң, өй һалыуҙың бер ауырлығы ла юҡ һымаҡ. Быға тиклем мин дә өй һалыуҙы, һәр хәлдә, өйлө булыуҙы еңел генә, стеналарын күтәрҙең дә, эше лә бөттө, тиеберәк уйлай инем. Аппетит ашағанда асыла, тигән кеүек, өй эше лә, бер башлаһаң, аппетиты асылып китеп, һәр нәмәне йотоп ҡына тора.**



# ЙОРТ ҺАЛЫУҘЫҢ НИМӘҺЕ БАР?

## Сутлайһы ла мүкләйһе!

"Үҙ йортом" программаһы буйынса Шамонин ауылында өй һалдыра башлағас, күңелдә, үҙемдеке, тигән тойғо тыуғайны инде. Ни тиһәң дә, беҙҙең кеүек ауыл һауаһын һулап, йәшел сирәмдә яланаяҡ йөрөп үҫкән кешегә ауыл ожмах кеүек инде ул. Бигерәк тә бөтә уңайлыҡтар өйөңдөң эсендә булһа. Өҫтәүенә, 10 сутый ер бушҡа бирелә.

Тәүге игәнәне 248 мең һум күләмендә индергәс (ярай әле, аҡса тота белөм!), 300 мең һумлыҡ сертификат буйынса йылына 8 процент түләү шарты менән биш йылға кредит бирелде. Ул ай һайын 30 һум самаһына кәмеп бара. Быйыл бер йылы өсөн түләп, тағы дүрт йыл ғына ҡалды, тип ҡыуанып ултырған көн. Сөнки бәхет ҡабағы асылды беҙгә: әгәр ҡалала фатир алыусылар ипотекаларын 25 - 27 йыл түләһә, бында биш йыл эсендә бурысыңды ҡайтараһың да, артабан икенсе хыялдар менән йәшәй башлайһың.

Өйҙөң стеналарын күтәреү, ҡыйығын ябыу тиҙ булды. Ут үткәртеү ҙә әллә ни ҡыйынлыҡ тыуҙырманы. Тәүгеләрҙән булғанғамы, электриктарға 15500 һум ғына түләнек. Ғына тим, сөнки был суммаға утты бағананан өйгә тиклем һуҙҙырып, бер розетка, бер лампочка ғына ҡуйҙырыусылар ҙа бар. Шуға утты былтыр көҙөн үк үткәреп ҡуйыуҙы ҡулай тип таптым. Бер эш кәмей торҙо, исмаһам.

Ә инде йәйгеһен, үҙ өйөмә күсенеп сығам, тип бер дәртләнгәс, тәүәккәлләргә булдым. Стеналарҙы шпаклевкалау өсөн материал ғына 11500 һумлыҡ булды, ә инде штукатур-малярҙар стенамды 4-5 ҡат "һыйпап" сыҡҡан өсөн 20 мең һум алды. Йылы иҙән эшләтеү һәм йылылыҡ системаһын үткәртеү дөйөм алғанда 51 мең һумға барып баҫты (бында "Империя тепла" магазинының махсус сертификат буйынса "Үҙ йортом" программаһында ҡатнашыусыларға ташлама яһауы ла ярап ҡалды). Атаң бай булмағас, күктән яуып тормағас, тигәндәй, ҡайҙа нисек экономияларға белмәй аптыраһың инде. Тәҙрә янаҡтарын ерена еткереп эшләү өсөн 8200 һумды сығарып һалдым.

Өй әҙерәк йәшәрлек хәлгә килгәс, июль айында күсендем. Йоҡ таксийын яллау 1 мең һумға төштө. Таш иҙәндә йөрөп булмай, эштән ҡайтҡас, аяҡ кейемен сисеп ташлап, ялан тәпәй йөрөгө килә - линолеум алырға тура килде. Уның өсөн 11500 һум сығып осто. Иҙәнгә линолеум йәйелде. Баҡтиһәң, эш быһың менән генә бөтмәй икән. Бүлмәләргә ишектәр ҡуйырға кәрәк. Уныһы дөйөм алғанда 11 мең һум булды. Уларға тотҡа, шарнирҙар, шөрөп-фәлән, тәҙөлөш "күбеге" һ.б. өсөн 1700 һум түләнде.

Газ үткәртеү үҙе бер мажара инде. Стенаға элеп ҡуйыла торған котел, торбалары менән бергә 23 мең һум самаһына барып баҫты. Газ үткәреүселәр килешеүҙе 26 мең һумға төҙөһә, һуңынан асыҡланыуынса, газ ҡаршы яҡтан үтә, имеш. Шул сәбәпле тағы ла 9 мең һум өҫтәп түләргә икән. Газ торбаларын өйгә һуҙыу өсөн траншея ҡаҙа башлағас, аптырауҙың сиге булманы. Минең йорт 9-сы кварталда. Әйтеүҙәренсә һәм үҙебеҙ күреүебеҙсә, унда һаҙамыҡ урын. Әммә минең өйөм башҡаларҙыҡына ҡарағанда ярты метр самаһы ҡалҡыу урында ултыра. Ләкин газ торбаһы өйө түбәндәрәк булғандар яғынан үткән дә, миңә килеп еткәс, юлдың теге яғына сығарылған. Сәбәбе, йәнәһе, һыу сыға. Траншея ҡаҙғандарын үҙем ҡарап торҙом. Күршенең траншеяһы шунда уҡ һыу менән тулһа, минекендә ул сама һыу юҡ ине. Һыу шаптырлап ағып яткан ерҙә торба һалынған. "Әллә газ торбаһы мотлаҡ һыулы урындан үтергә тейешме?" тип һорағас, "Беҙ белмәйбеҙ, проектты "Уфа-газ" ойошмаһы эшләне", тип яуапланылар. Әгәр газ торбаларын һыулыраҡ яҡҡа сығарып һалалар икән, күрәһең, улар, ысынлап та, һаҙ эсендә ятырға тейештер. Беҙ ни, технологияларҙы белмәгәс, бары тик күҙаллайбыҙ ғына... Әллә Рәсәйҙә аҡыл менән аңлап булмай, тигәндәре шулмы?

Торба-фәләнгә, тимер-томорға ҡағылғас, килеп тыуған хәл итәһе мәсьәләләрҙе лә яҙмай булмай. Торлаҡ фондына участка һайлап йөрөгәндә үк, маҡтап-маҡтап, ошо урынды тәҡдим иттеләр. Машинафәләнең булмағас, картанан ғына ҡарап, ҡайҙа нимә икәнен билдәләп булмай. Баҡтиһәң, был урын һаҙамығыраҡ икән. Тик генераль план буйынса административ биналар уның эргәһендә булырға тейеш ине. Административ биналар булғанда, һыуҙы икенсе юлдан ебәреү, һаҙамыҡ урынды киптереү ысулын табырҙарына ышаныс ҙур ине. Сөнки дренаж эшләйбеҙ, киптерәбеҙ, тип әллә күпме вәғәҙәләр бирелде. Аҙаҡ килеп, Идара итеү компанияһында (Управляющая компания, ул оператив штаб та) һыу, канализация үткәреүгә ғариза ҡабул итмәй аптыраттылар. Ә республика етәкселеге, тиҙерәк күсенегеҙ, тип ашыҡтырҙы. Етмәһә, август айында юлдарға асфальт һалына, шуға тиклем үткәреп өлгөрмәһәгеҙ, һуңынан ҡиммәт хаҡҡа эшләтәсәкһегеҙ, тип тә күнелгә шом һалдылар. Дренажға килгәндә инде, уны үткәреү өсөн 50 млн аҡса кәрәк, тиҙәр ине. Ошо көндәрҙә, дренаж һалыу эше лә башланған. Бары тик сабыр итеп түҙергә генә кәрәк.

Теманан саҡ ҡына ситләштем, ахыры. Мин бит сығымдар хаҡында һүҙ башлағайным. Һыу үткәреү, шулай итеп, 18 мең һумға барып баҫа. Канализация соҡорон ҡаҙҙыртыу ҙа шул уҡ сумманы "йота".

Газды тоташтырыу үҙе бер мәшәҡәт (был хаҡта айырым яҙырлыҡ). Тоташтырыр өсөн мотлаҡ вентиляция булырға тейеш. Әгәр бер вентиляция ҡуйҙыртһаң, 10 мең һумға төшә, икәү икән - 15 мең. Шул уҡ ваҡытта уны 5-6 меңгә лә эшләтеп була, тиҙәр.

Коммуникациялар үтмәгәс, бар халыҡ, ауылдағыса, бәҙрәф төҙөп ҡуйған. Шул арала аҡыллы баштар мул ғына аҡса эшләп алды. Башта бәҙрәфтәр 2 мең һумдан һатыла ине, хәҙер 3200 һумға тәҡдим итәләр (мин 1500 һумға эшләтеп алдым). Ҡырсынташ һәм ҡом килтертеү менән дә хәлдәр шулай тора. Башта бер машинаны 1200 һумға һатһалар, хәҙер иһә 4 мең һумдан ашыу (күршеләрем йәшәһен, улар бер машина ҡомдо 3 мең һумға килтертергә һөйләште). Аллаһ рәхмәтенән булып, канализация эшләтеп ҡуйһаҡ, ванна бүлмәһенә кәрәк-яраҡ алыу өсөн 10 мең һумдан ашыу аҡса сығасаҡ. Әгәр инде унда плитка йәбештерәм тиһәң, тағы ла түңәрәк кенә суммаға "кеҫә йоҡартырға" кәрәк. Бынан тыш, кварталды бер төрлө итеп көртәләп алыу өсөн 12 меңдән ашыу аҡса кәрәк. Унан тағы күршеләр араһын да тоторға кәрәк бит әле.

Элегерәк эш аҡса мәсьәләһенә барып төртөлһә, руссалап ҡына: "Деньги - зло", - ти инек. Хәҙер уны дауам итеп:"Зла не хватает", - тип йомғаҡлап ҡуйырға ла була. Бәлки, аҡса был тормошта мөһим дә түгелдер, беҙҙең аңға иң мөһиме - рухи байлыҡ, тип һеңдергәндәр. Тик берәү ҙә һинең рухи байлығыңа ҡарап ҡына ризыҡ бирмәй. Рухи байлыҡ эргәһендә матди байлығың да булырға тейеш. Заманы шундай.

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Өй тип әйтеүе генә еңел. "Ҡумта" ултыртҡас та, ерене еткерәм, тиһәң, өйөһе лә өйәһе икән. Юҡҡа ғына, өйҙөң бер ерен ямаһаң, икенсе ерене ямау кәрәк, тимәйҙер халыҡ. Шулай ҙа ҡалала кемдеңдер фатирын ҡуртымға алып йәшәгәнсе (әгәр ҡумҡлап йәшәһәң, бер койка-урын 2500 һум, әгәр ике кеше генә йәшәргә теләһәң, 5000-6000 һум), шул аҡсаны үҙ өйөңә тотоноуың, хатта көн һайын эштән һуң бер ҡаҙаҡ ҡына ҡағып ҡуйыуың да күпкә файҙалыраҡ.**

Зәйтүнә ӘЙЛЕ.

✓ *Кисәнән бирле шулай бер-береһененә тән генә түгел, йән йылыһын да тойоп яталар. Бәләкәй ҡыҙ өсөн әлеге мәлдә ошо йән эйәһенән дә ҡәҙерлерәге юҡ. Әсәһе кисә үк ишекте тыштан бикләп сығып киткәйне.*

ДОНЪЯ - ҠУЛАСА



# АҺ, БЫЛ СЕРИАЛДАРҘАҒЫ ЯҘМЫШТАР!

## Һинең тормошоң да шуларға оҡшаш түгелме?

**Ер йөҙөндә нисә кеше булһа, шунса яҙмыш. Тәҙрәләрендә берәм-берәм ут ҡабынған бынау йортто ғына алайыҡ. Нисә кеше йәшәһә, шунса йәшәйеш, көнитмеш, ғаилә тарихы унда. Кемдер эштән ҡайтып ут ала, бәғзеләре йоҡоһонан яңы уянып утын яҡтырта. Берәүҙәр ҡунаҡ көтә, икенселәре, киреһенсә, оҙата, өсөнсөләре бәйләм бәйләй, китап уҡый, телевизор ҡарай.**

Бүлмәгә ут алмай ғына телевизор ҡараусылар араһында Гөлсирә исемле ханым да бар. Телесериал ҡарарға ярата ул. Иң яҡын, ҡәҙерле кешеһен ҡаршы алған кеүек көтә һәр кисте, сөнки яратҡан сериалдары башлана. Рәхәтләнеп, йомшаҡ кәнәфигә ултырып ҡына ҡарар өсөн көнө буйы әҙерләнә тиһәң, бер ҙә арттырыу булмаҫ. Иртән йәһәтләп тора һалып, өйөн йыйыштыра, йыһаз-ҡаралтыларының туҙанын һөртөп, иҙәненең һаңын һурҙыртып алғас, көн буйына етерлек бешеренеп-төшөрөнөп ҡуя. Хәйер, бер үҙенә унын күп тә кәрәкмәй. Яңғыҙ булһа ла, семтемләп ултырырға яратмай, өҫтәлдә бөтә нәмәнең мул булғанын, ашаһа ла, ашамаһа ла ризыҡтәғәмдең өйөлөп тороуын ярата. Ярай әле, пенсияһы мул ғына. Хаҡлы ялға сыҡҡас та эшләүенең файҙаһы булғандыр. Ни тиһәң дә, башҡа пенсионерҙар һымаҡ осто осҡа ялғамай, һаҡлыҡ кенәгәһенә һалырлыҡ булмаһа ла, иркен тотона. Иркен тигәс тә, уңлы-һуллы ырғытмай ул, аҡсаның ҡәҙерен белә, тормош өйрәтте. Яҙмыш һынауҙарын бер үҙе үтергә тура килде уға, ҡыҙын да тыуғандан алып бер үҙе ҡараны. Шулай ҙа юморист Гөлсөм Хәбибуллинаның яратҡан көләмәсендәге кеүек, кейәүгә сыҡмаһа ла, бер төн дә яңғыҙы йоҡламаны Гөлсирә. Һөйәрҙәре нисек тиҙ табылһа, шундай уҡ тиҙлектә юғалып торҙо. Ни ғилләлер, артынан ирҙәр бер тотам ҡалмаһа ла, береһе лә, алам, тимәне. Ғүмер тигәнең аҡҡан һыу һымаҡ икән, үткәне һиҙелмәй ҙә ҡалған. Гөлсирә, ниңәлер, был тормошон ҡаралама ғына, тиҙҙән ысыны башланыр ҙа, бына тигән итеп донъя көтөрмөн, унынһында инде хаталарҙан азат булырмын, ысын мөхәббәтемде осратырмын, дөрөҫ кенә йәшәрмен, тип уйланы. Ғүмер ике килмәгәнен мөҙҙәтле ялға сыҡҡас ҡына аңланы. Һаулығы ла ныҡ ҡына ҡаҡшағайны, берҙән-бер ҡыҙы ла ҡулдан ысҡынғайны.

"Бәхетһеҙ булыу - матур ҡатындарҙың өлөшө", тигән уй һуңғы ваҡытта йыш күңеленә килә. Улар тураһында ғәйбәт, нахаҡ һүҙ йөрөй, уларҙан көнләшәләр, һыйҙырмайҙар. Ниндәй генә сериалды алма, төп героиняларҙың береһен дә тулы бәхетле тип булмай, һоҡланып, һөйөп, яратып ҡына ултыра торған ҡатындар! Бына, мәҫәлән, Виктория Руффо уйнаған Бразилия сериалындағы Валерия. Ниндәй генә ҡаршылыҡҡа осраманы ул үҙ ғүмерендә. Ире хыянатын да кисерҙе, балаларыныҡын да, яңынан һөйөү ғазабын да татыны. Ошоноһо иң ауыры булғандыр яратҡан актрисаһы өсөн. Бәхетле булыу өсөн бөтә нәмәһе лә бар, ә күҙҙәре һәр ваҡыт һағышлы, тип уйланды. Уны йәлләп, аҙ күҙ йәше түкмәне Гөлсирә. Әле лә тамағына тығылған төйөрҙө саҡ йотоп ебәрҙе. Янында күршеһе ултырмаһа, күптән балауыҙ ебетеп ултырыр ине. "Бигерәк нескә күңеллемен, хис-тойғоға тиҙ биреләм, - тип аҡланды күршеһенә. - Шул уйлап сығарылған персонаждарҙың уңышына һөйөнөп, уңышһыҙлығына көйөнөп, нервымды ҡуҙғатып бөттөм инде". Күршеһе иһә иге лә, сиге лә күренмәгән бындай сериалдарға, "һабынлы операларға" бөтөнләй битараф. Асҡысын юғалтыу сәбәпле генә бында ултырып, өйөндәгеләрҙең береһе ҡайтыуын көтә. Телевизор экранына инеп китерҙәй булып, бөтә иғтибарын кино ҡарауға йүнәлткән Гөлсирәнән ҡыҙы менән ейәнсәре ҡайҙа йөрөүе тураһында ла һорашырға ҡыймай ултыра.

Ошо уҡ ваҡытта ҡаланың шәхси секторындағы өйҙәрҙең береһендә һыуыҡ мейескә терәлеп, дүрт-биш йәштәге бер ҡыҙ йоҡлай. Мейестән йылы килмәй. Ҡыҙсыҡты ауыҙ-мороно ҡутырлап, күҙҙәре ҡыҫылып бөткән ауырыу ҡарт бесәй генә йылыта. Кисәнән бирле шулай бер-береһененә тән генә түгел, йән йылыһын да тойоп яталар. Бәләкәй ҡыҙ өсөн әлеге мәлдә ошо йән эйәһенән дә ҡәҙерлерәге юҡ. Әсәһе кисә үк ишекте тыштан бикләп сығып киткәйне.

...Бынан бер нисә йыл элек әлеге "нескә күңелле" Гөлсирә, ейәнсәремде тәрбиәләгән өсөн аҡса түләнһә, үҙем алып ҡарар инем, унын өсөн ниндәй документ, белешмәләр кәрәк икән, һорашырға китеп барам әле, тип, балиғ булмағандар эше буйынса комиссияға китеп бара ине. Аҡса мәсьәләһен хәл итә алмаған ул, шунын өсөн дә ейәнсәрен әхлаҡһыҙ тормош алып барған, балаһын бар тип тә белмәгән ҡыҙы менән урамға сығарып ебәргән.

Сериалдағы Валерияның балалары өсөн хафаланып, борсолоп, илап ултырғанда, Гөлсирәнең үҙ ейәнсәре икенсе көн йылы аш күрмәй, ҡараңғы кистә урамдан төшкән яҡтылыҡта төҫмөрләнгән һыуыҡ мейескә арҡаһын терәп ойоп ята. Әле уға бер нәмә лә кәрәкмәй. Илағыһы ла, ашағыһы ла килмәй...

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# ИСМИ ӘҒЗӘМ ДОҒАҺЫ

**Әл-Үәкиилү** - яҡлашыусы, һәр изге эште һәм ғәмәлде тапшырырға лайыҡлы зат. Ул Уға тапшырыусыларҙы һәм инаныусыларҙы һөйөндөрә. Бер ҡаза килеүҙән, уттан, һыуҙан, хәүеф-хәтәрҙән ҡурҡҡан кеше был исемде уҡып, Раббыһына тапшырһа, имендектә булыр.

**Әл-Үәлиийү** - ышанып тапшырыусы. Уға буйһоноусыларға, Унан ҡурҡыусыларға ғәмәлдәрен ышанып тапшырыусы. Үҙе яралтҡандарҙы һаҡлаусы. Был исемде күп әйткән бәндә Аллаһы Тәғәләнең ышаныһына лайыҡ булыр.

**Әл-Хәмиидү** - данлы, маҡтауға лайыҡ. Уны һәр саҡ "Әл-хәмдүлил-ләһ" тип маҡтау мотлаҡ. Был исемде яҙып, һауытҡа һалып, һыу менән сайҡатып эсһә, боҙоҡ теле изгегә әйләнер.

**Әл-Мухсийү** - иҫәпләүсе, үҙенең белеме менән һәр нәмәгә үҙенең сиген ҡуйыусы. Ул билдәләгән сиктән бер кем дә сыға алмай. Был исемде йыш әйткән бәндәне Аллаһы Тәғәлә үҙе билдәләгән сиктәренән сиктә сығармаҫ.

**Әл-Мүбедийү** - башлап ебәреүсе. Бар нәмәне ҡоралһыҙ-ниһеҙ, бер нәмәгә эйәрмәй, иң әүәл бар итеп, башлап ебәреүсе.

**Әл-Әхәәдү** - Аллаһы Тәғәлә үҙе генә, берәү генә. Уға тиңдәш юҡ. Яңғыҙ ултырып, мең мәртәбә "Йәә Әхәәдү" тигән бәндәгә фәрештәләр Аллаһтан ярҙам эстәр.

**Әл-Мәғиидү** - кире ҡайтарыусы, бар ғаләмдә йәшәп үткәндән һуң кире терелтеүсе зат. Был исемде ҡырҡ туғыҙ мәртәбә уҡыған кешенең ғилеме артыр.

УҢЫШ ҠАҘАН



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Проблеманы нисек хәл итергә?

Әле һүҙ барасаҡ процедура һеҙгә өлөшләтә таныш. Унын этаптары хәтерегеҙҙә яҡшы һаҡланған икәнлегенә тағы бер тапҡыр инаныу өсөн уны өс тапҡыр уҡып сығығыҙ.

**Теләһә ниндәй проблеманы хәл итеү мөмкинлеге биргән күнекмә:**

- Уңайлы итеп ултырығыҙ, күҙҙәрегеҙҙе йомоғоҙ һәм өс тапҡыр тәрән итеп тын алығыҙ.
- Асыҡ итеп бер нисә тыныс картинаны күҙ алдына килтерегеҙ.
- Көсөргәнештән арыныу өсөн ундан бергә тиклем кирегә һанағыҙ.
- Һеҙ хәл итергә теләгән проблемалы хәлде ҡараңғы, тоноҡ төҫтәрҙә тип күҙ алдына килтерегеҙ.
- Хәлдең яҡшырғанын төрлө асыҡ төҫтәрҙә күҙаллағыҙ.
- Үҙегеҙгә "Мин үҙ аңымда" тип ҡабатлап, күҙҙәрегеҙҙе асығыҙ. Хәл итеү образының тап бына ошо булыуын һәм унын тормошҡа ашыуын тойоғоҙ.
- Хәҙер китапты ситкә алып ҡуйығыҙ һәм күнекмәне өс тапҡыр ҡабатлағыҙ.

Проблеманы хәл итергә ярҙамлашыу тойғоғоҙ ыңғай йүнәлеш алыр. Ул башҡа проблемаларҙы хәл итеүгә лә булышлыҡ итер. Был йүнәлештә ни тиклем күберәк эшләһәгеҙ, һөҙөмтәһе лә лайыҡлыраҡ булыр.

Бында арауыҡ ҡамасауламай - Ер шарының икенсе осонда булған проблеманы ла хәл итергә мөмкин. Шулай уҡ проблеманың масштабы ла роль уйнамай - ул бер кешегә лә, тотош илгә лә ҡағылыуы ихтимал. Ваҡыт та бында мөһим түгел - проблема мәңгелек булып тойолһа ла, унын Берлин стенаһы ҡолаған кеүек, тиҙ генә юғалыуы ла бар.

Хыялдың иҫ киткес көсө тураһында гәзиттәр ҙә, матур итеп биҙәлгән журналдар ҙа яҙмай, әммә ул ғүмер буйы йәшәй. Миҫалға уйлап табыусыларҙың, рәссамдарҙың, архитекторҙарҙың ижадын алырға була.

Ҡасандыр ниндәйҙер дизайнер хыялында күрмәһә, һеҙ ултырған ултырғыс та эшләнмәҫ ине. Башта ул уны уйлап таба, аҙаҡ һыҙымын һыҙа, ағас оҫталары шуға ҡарап ултырғыс эшләй. Модельер башта "күрмәһә", һеҙ кейеп йөрөгән кейемдәр ҙә булмаҫ ине. Ул хыялында тыуҙырғандан һуң ғына тәүге өлгөләр барлыҡҡа килә һ.б.

Хыялдағы образдар тотош цивилизацияларҙы тыуҙыра. Үҙ халҡы тарихы тураһындағы грек мифтарының сығанағы - фантазия. Шуны уҡ грек сәнғәте тураһында ла әйтергә мөмкин. Панопул кеүек кешеләр ижадтың һәм матурлыҡтың яңы стандарттарын тыуҙырыр тере хыял һәләтенә эйә булған. Сократтың ижади тере аҡылы философияла революция яһай һәм рухи сығанаҡтарға ҡайтыуҙың сәбәбе булып тора.

Сократ принциптарына оҡшарға тырышыу һөҙөмтәле булмай. Уларҙы Полигнот фрескалары итеп сәнғәткә индереү ҙә емеш килтермәй. Әйтергә кәрәк, хыялға хәрәкәт ҡушылып, оҡшатыуға юл асҡас, донъяла грек йоғонтоһо юҡҡа сыға башлай.

Хыял - ул Илаһтың ижади потенциалын файҙаланыу. Унын менән бәйләнеште һаҡлау - тормошҡа илһам асҡысы.

**Роберт СТОУН.**



## 20 ДЕКАБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.10 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "ЖКХ"
12.00 Новости
11.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "След". Сериал
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Жди меня"
21.00 "Время"
21.30 "Побег". Остросюжетный сериал
22.30 "Спецрасследование"
23.30 "Ночные новости"
23.50 "Подпольная империя", 7-я серия. Криминальная драма
00.50, 03.05 "Мексиканец"
03.00 Новости
03.15 "Противостояние"

### РОССИЯ 1
**Уважаемые телезрители! Телеканал приносит свои извинения за перерыв в работе в связи с профилактикой до 14.00**
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
16.50 "Слово женщине". Сериал
17.55 "Ефросинья", 215-я серия
18.55 "Институт благородных девиц", 55-я серия
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши"
21.00 "Капитан Гордеев". "Золотая клетка", 2 части. Детективный сериал
22.55 Праздничный концерт ко Дню работника органов безопасности РФ
00.50 "Вести+"
01.10 "Честный детектив"
01.45 "Отпуск в сентябре". Драма
04.45 "Вести. Дежурная часть"

### НТВ
04.55 "НТВ утром"
08.30 "Кулинарный поединок"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00, 16.00, 19.00 "Сегодня"
10.20 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.00 "Сегодня"
13.30 "Кодекс чести"
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Возвращение Мухтара". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Литейный". Сериал
21.30 "Брат за брата". Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "Честный понедельник"
00.25 "Школа злословия"
01.15 "В зоне особого риска"
01.45 "Джейсон Икс". Фильм ужасов
03.35 "У.Е.", 5-я серия. Сериал
04.25 "Профессия - репортер"

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**09.00 "Новости" (на русск. яз.)**
**09.15 "Неслучайные люди"**
**09.45 "Эдера"**
**10.45, 20.00 "Учим башкирский язык"**
**11.00 "Тамыр". "Гора новостей" и другие"**
**12.00 Новости (на башк. яз.)**
**12.15 "Истории"**
**12.30 "Орнамент**
**12.45 "Надо знать"**
**13.00 "Хорошее настроение"**
**14.00 "Эдера"**
**15.00 "Гора новостей"**
**15.15 "Царь горы"**
**15.30 "Приключения в стране эльфов"**
**16.00 "Знакомьтесь, семья Санта Клауса"**
**17.45 "Полезные новости"**
**18.00 Новости (на башк. яз.)**
**18.15 "Спецрепортаж"**
**18.30 Новости (на русск. яз.)**
**19.00 "Истории"**
**19.15 "На самом деле"**
**19.45 "Надо знать!"**
**20.45 "Сэнгелдек"**
**20.30 "Орнамент"**
**20.45 "Пора разобраться"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Неслучайные люди"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.00 "Спецрепортаж"**
**23.15 "Одинокий Санта желает познакомиться"**
**00.55 "Ночные новости"**

## 21 ДЕКАБРЯ ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.10 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "ЖКХ"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "След". Сериал
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Побег", 18-я серия
22.30 "50 шляпок для пани Моники"
23.30 "Ночные новости"
